ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-2 октябрь - ноябрь (карасай - ҡырпағай) 2018

№43 (825)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Кемдәр китте, кемдәр килде?**



4

**Диплом бар - эш юҡ,**

эш бар - күңелгә ятмай...



6

**Хәләл ефетенә...**

"әсәһе", "атаһы" тип өндәш, әйҙә



8-9

**Мин башҡортса һөйләшәм!**



10

**ТВ-программа** 14


***Шул тиклем күрә алмаған дошманың бармы? Булһа, һин уға байлыҡ, тормош ләззәттәре, күңел асыуҙар, сикһеҙ власть теләп: күрерһең, ул ошолар арҡаһында һәләк буласаҡ.***

***(Жан Робине).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Донъя мәшәҡәттәренән арынып, юлда йыш йөрөйһөгөҙмө? Һуңғы бер сәфәрегеҙ тураһында һөйләгеҙ әле?

***Артур ИҘЕЛБАЕВ, эшҡыуар, блогер:*** Бына октябрь баштарында ғына Рәсәйҙең боронғо Волга буйы ҡалаларының береһе - Тверҙә һәм ошо өлкәнең Завидово ял комплексында бөтәбеҙ өсөн дә һөйөнөслө бер ваҡиға айҡанлы булып ҡайтырға тура килде. Тап ошонда 4-5 октябрҙә "Рәсәй йылғалары" Милли туристик форум сиктәрендә "Йыл маршруты" төбәк конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы булып үтте. Мин унда "Ысын Башҡортостан" этнотуры проектының авторы һәм етәкселәренең береһе булараҡ ҡатнашҡайным. Дөрөҫ, был әле ил буйынса конкурстың тәүге этабы булды, тиҙҙән уның финалистары менән Себер һәм Алыҫ Көнсығыш федераль округтары ла ҡатнашасаҡ дөйөм конкурс Ульяновскиҙа үткәреләсәк. Шулай булһа ла еңел бирелмәне еңеү, сөнки башҡа төбәктәрҙән дә хайран итерҙәй туристик маршруттар менән килеүселәр күп ине. Хәҙер бит жюри ағзаларын милли кейемдәр йә этник элементтар менән генә ғәжәпкә ҡалдырыуы ҡыйын: былар һәр төбәктең тип әйтерлек этнотур программаһында теге йәки был дәрәжәлә сағылыш таба. Беҙҙең "Ысын Башҡортостан" этнопроектыбыҙ "Иң яҡшы этнографик маршрут" номинацияһында беренсе урын яуланы. Башҡа маршруттарҙан айырмалы, "Ысын Башҡортостан", исеме үк әйтеп тороуынса, туристарҙы республикабыҙҙың иң гүзәл төбәге булған Бөрйән районы биләмәһенә алып барыу, Шүлгәнташ мәмерйәһе менән таныштырыу ғына түгел, ә уларҙы ошо мөхиткә "сумдырып алыу", йәғни бер нисә көн уларҙың үҙҙәрен башҡорт итеп тойоуына өлгәшеү маҡсат итеп ҡуйылды. Бының өсөн уларҙы тәбиғәт ҡосағында тирмә рәүешендә йыһазландырылған өйҙәргә урынлаштырыу, башҡорт тоҡомло аттарҙа - һыбай (ҡыш иһә - ат егелгән саналарҙа) йөрөргә, башҡорт бейеүҙәренә, уҡ менән атыу, хатта һыбай сабып барышлай уҡ атыу күнекмәләренә өйрәтеү, туристарҙың үҙҙәре ҡатнашлығында башҡорт аш-һыу ризыҡтарын әҙерләү (мастер-класс), башҡорт мунсаһына (хуш еҫле үләндәрҙән аромотерапия, көс-ҡеүәт өсөн бал, айыу майы менән ыуыныу, массаж элементтары файҙаланып) индереү, уларҙы ҡымыҙ, буҙа, айран, үлән сәйҙәре менән һыйлау, туристарҙың үҙҙәрен халыҡ йолаларының береһендә ҡатнаштырып, сәхнәләштерелгән уйындар ойоштороу (беҙҙең проектта ул " Яуға оҙатыу" сәхнәһе) башҡорт тормош-көнкүрешенә генә түгел, уның тарихына, мәҙәниәтенә "сәйәхәт" иттереү, туристарҙы үҙҙәрен башҡорт итеп тойорға мөмкинлек биреү форсатын да маҡсат итеп ҡуйябыҙ һәм был беҙҙең турҙа ял итеп өлгөргән кешеләрҙең бөтәһенә лә бик оҡшаны. Ғөмүмән, туристарға күрһәтерлек беҙҙең милли ғорурлыҡ объекттарыбыҙ, хазиналарыбыҙ, йолаларыбыҙ бик күп, эшләргә кәрәк. Был конкурсты ойоштороусы - Ижтимағи бәйләнештәрҙе үҫтереү фонды рәйесе Г. Шаталов әйтмешләй, ысын туризм милли үҙенсәлекте күрһәтергә тейеш. Минең хыялым - һәр бер районда, һәр бер башҡорт ауылында этник ҡунаҡ йорттары, кафелары булдырырға ине! Ә инде был сәфәр тәьҫораттарына килгәндә, бик ҡәнәғәт ҡайттым, сөнки "Ысын Башҡортостан" турына ҡағылышлы, үҙебеҙҙең дөрөҫ йүнәлештә эшләүебеҙгә тағы бер ҡат инандым. Бөтә Рәсәй конкурсының тәүге этабына йомғаҡлау тантанаһы юғары кимәлдә үтте. Уның эшендә Тверь өлкәһе губернаторы Игорь Руденя, РФ Хөкүмәте вице-премьеры Ольга Голодец, Рәсәй Туризм индустрияһы берлеге президенты Сергей Шпилько кеүек почетлы ҡунаҡтар ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Ғөмүмән, эшлекле шәхестәр, коллегалар менән күҙмә-күҙ осрашып аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу күңелде байытты.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## ҒАРИЗА

***Мин ғариза яҙам туған телгә,***
***Яҙам тағы дәүләт теленә!***
***Күргем килә минең башҡорт телен***
***Кәрәкле тел итеп илемә.***

***Кәрәкле тел миңә башҡорт теле,***
***Уның менән яҡты даирәм.***
***Иң боронғо, матур, бай тел, тиеп***
***Меңәр телдән уны айырам.***

***Инәй һөтө менән һеңгән минең***
***Йөрәгемә ошо ғәзиз тел.***
***Алдырамын, уҡып илһамланам***
***Башҡорт журналдарын, гәзитен.***

***Баламды мин сәңгелдәктә саҡта***
***Үҙ телемдә йырлап тирбәтәм.***
***Башҡорт һүҙен, башҡорт хәрефтәрен***
***Өс йәшенә тиклем өйрәтәм.***

***Үҙ өйөмдә тотош бер ил минең!***
***Әгәр кәрәк икән бер имза,***
***Мәктәптә лә яҙам:***
***Башҡорт теле -***
***Ватан телем, тигән,***
***Туған телем, тигән,***
***Дәүләт теле, тигән***
***Ғариза!***

**Тамара ИСКӘНДӘРИӘ.**

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




**2019 йылдың тәүге ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 609 һум 96 тингә яҙылыу дауам итә.**

• Ошо көндәрҙә 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан кемдәрҙер **Мәүлит Ямалетдиновтың "Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма", Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан", Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре", Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан", Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ", Зөлфиә Ханнанованың "Мин башҡорт тип танышығыҙ", Таңһылыу Ҡарамышеваның "Мәңгелек сәфәр", Миләүшә Ҡаһарманованың "Күңелем йылы теләй", Азат Ярмуллиндың "У истоков Башкирской Республики", "2019 йылға башҡортса дини календарь"** һәм башҡа китаптарға эйә буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЯЛҒАН ӨЛГӨЛӘРГӘ ЭЙӘРМӘЙЕК!

***Тәскирә ДАЯНОВА, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең Яҙыусылар союзы ағзаһы:*** Борсоуға һалған мәсьәләләр күп, әлбиттә. Тәү сиратта балалар яҙыусыһы булараҡ, уларҙың киләсәге тураһында борсолам. Тәүфиҡлы, башҡорт рухлы, туған телдәрендә һөйләшеп үҫәләрме икән? Сөнки бөгөнгө заманда нәҡ балаларға төрлө яҡлап һөжүм көслө: телевидение, интернет, уйындар аша ла кире йоғонто яһаған ялған үрнәктәр күп. Беҙҙең ауылда оло быуын кешеләре генә йәшәргә ҡалды, йәштәр эш булған ерҙә төйәкләнә, балалар юҡ та тиерлек. Шуға, бәлки, хәҙерге йәштәрҙең холоҡ-фиғеленә ҡағылышлы дөрөҫ баһа бирмәйемдер. Әммә телевизор ҡараһаң, интернет селтәрендәге күренештәрҙе иҫәпкә ала башлаһаң, ҡайһы саҡта сәстәр үрә торорлоҡ. Йәш быуындың кейенеү, аралашыу ғәҙәтенә генә түгел, тәртибен һәм уй-фекерен этик нормаларға тап килмәҫлек итеп үҙгәртеүгә йүнәлтелгән пропаганда бик әүҙем алып барыла. Ҡайһы берҙә үҙебеҙҙең башҡорт матбуғатында ғына аҡыллы, уңышлы, эшһөйәр йәштәр барлығы тураһында уҡып беләм. Ни өсөн бына шундай йәш шәхестәр тураһында мәғлүмәт киң таралмай? Замана ата-әсәләре балалары менән шөғөлләнергә күп ваҡыт бүлә алмай, ул-ҡыҙҙарының киләсәген хәстәрләгәндәр аҡса эшләргә, донъя көтөргә тырыша. Балалар баҡсаһында педагогтар күпме генә тырышып эшләмәһен, өйҙә саҡта телевизор һәм компьютер артында ултырған балаларҙың тормошҡа ҡарашы шундағы идеологияға ярашлы формалашыуы бар. Ә унда ярым-яланғас кейенгән кешеләр, мәғәнәһеҙ йәнһүрәттәр, шәфҡәтһеҙлек һәм көс өҫтөнлөгөнә баҫым яһаған фильмдар, уйындар бихисап. Ошондай шарттарҙа тәрбиәлелек, әҙәплелек тигән һыҙаттарҙың ҡиммәте юғалып тороуына бер ҙә аптырарлыҡ түгел. Шуға ла беҙгә тарихыбыҙға, йолаларыбыҙға йөҙ борорға кәрәк, шунһыҙ йәш быуындың күңеленә рухи ҡиммәттәрҙе һалып үҫтерә алыуыбыҙ икеле. Борон башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ир-егеттәр кеүек батыр йөрәкле, ҡыйыу булһа ла, нәзәкәтлек һәм нәфислек тураһында ла онотмаған. Асыҡтан-асыҡ та кейенеп йөрөмәгән, хатта сәс толомо ла ҡаплаулы булған. Ислам динен дә халҡыбыҙ йәшәйешенә тап килгән өсөн ҡабул иткән: бер ҙә башҡа дингә килмәгәндәр, ә үҙҙәре күнеккән ғәҙәттәргә ауаздаш булғанын һайлағандар. Шуға бына ошолар тураһында аҙмы-күпме белгән, тамырҙары менән ҡыҙыҡһынған кеше генә туған телен дә, мәҙәниәтен дә беләсәк. Был инде тағы бер борсоуға һалған мәсьәләләрҙең береһе - башҡорт теленең киләсәге тик беҙҙең мөнәсәбәттән, беҙҙең аңлауҙан ғына тора. Ер йөҙөндә башҡорт милләте Хоҙай насип иткәнсә күпме йәшәй, шул тиклем телебеҙҙе лә һаҡлап йәшәтәйек. Башҡорт халҡының ул-ҡыҙҙары булараҡ, асылыбыҙҙы һаҡлау иң төп бурысыбыҙ булыуын хәтерҙән сығармайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Донъя мәшәкәттәренән арынып, юлда йыш йөрөйһөгөҙмө? Һуңғы бер сәфәрегеҙ тураһында һөйләгеҙ әле?

**(Башы 1-се биттә).**

***Әминә ӘҘЕЛҒУЖИНА, Күгәрсен районы, Мораҡ ауылы:*** Беҙ ғаиләбеҙ менән сәйәхәт итергә яратабыҙ. Буласаҡ берәй сара хаҡында кис ишетеп ҡалып, иртә менән сығып киткән саҡтарыбыҙ ҙа йыш була. Был турала туғандар-таныштар ҙа белеп бөткән инде, шуға ла йомоштары төшөп, шылтырата ҡалһалар, иң тәүҙә, һеҙ бөгөн ҡайҙа, өйҙәме, тип һорай һалалар. Египет, Төркиә, Ғәрәп Эмираттары кеүек мосолмандар күпләп йәшәгән сит илдәрҙә лә булырға тура килә. Күптән түгел шундай сәйәхәт менән Сәғүд Ғәрәбстанына хаж сәфәре ҡылып ҡайтыу бәхете тейҙе. Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, әлегә тиклемге юл тәьҫораттары ни тиклем генә йөкмәткеле һәм бай булмаһын, уларҙың береһе лә хаж сәфәре менән сағыштырғыһыҙ һәм уға тиңләшә лә алмай, әлбиттә. Хаж минең өсөн үҙ ҡулым менән йөрәгемде, йәнемде алып, зәм-зәм һыуында йыуып, сафландырып, кире урынына ҡуйып ҡайтҡандай тойолдо, сөнки Мәккәлә йән эсе менән тышҡа әйләнә, бөтөн тормошоң күҙ алдынан үтеп, үҙеңде мәхшәр майҙанында итеп хис итәһең. Ҡайтҡанда Мәккәнән сығып китеүе шул тиклем ауыр, Ҡәғбәтулла янындағы сәғәтле ай, ҡалдырма, тип арттан эйәргән бала кеүек эйәреп тик килә һымаҡ. Бер генә шатлыҡ - ул Мәҙинәгә юл тотоу. Бәйғәмбәребеҙгә сәләм биреү шатлығы тынысландыра. Әгәр Мәккәнән Мәҙинәгә бармай, хажиҙар тура ҡайтып китһәләр, улар йөрәк өйәнәгенә дусар ителер ине. Ә Мәҙинә ҡалаһы сығырынан сыҡҡан йәненде тынысландырып, йөрәкте урынына ултыртып ҡайтара. Бына шундай хистәр кисерелде хаж сәфәрендә. Мосолмандар хаж сәфәрен үтәү бурысына әһәмиәт бирһәләр ине. Улар бөтөнләй икенсе кеше булып, яңынан тыуғандай, таҙарынып ҡайтырҙар ине.

***Лариса АБДУЛЛИНА, яҙыусы, журналист:*** Бөгөн халҡыбыҙҙы "Урал батыр" эпосынан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Был мәшһүр халыҡ әҫәре милләтебеҙҙе донъя кимәлендә таныта, ҡеүәте хаҡында һөйләй, тамырҙарыбыҙҙың тәрәнлеген раҫлай. Әгәр Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән атаҡлы сәсән Мөхәмәтша Буранғолов уны үҙ заманында яҙып алмаған, Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәр менән осрашмаған булһа?.. Хатта уйлауы ла ҡурҡыныс! Иң бөйөк һүҙ - ул "Урал батыр" эпосында. Башҡорт әҙәбиәтенә бик күп классиктарҙы тыуҙырған Ырымбур ерененең иң ҙур шәхестәренең береһе ул - 1888 йылдың 15 декабрендә Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Үрге Ильяс ауылында (халыҡ телендә - Тәңес) тыуған Мөхәмәтша Абдрахман улы. 1900 йылда эпосты яҙып алыуын иҫәпкә алғанда, был мәлдә егеткә ни бары 22 йәш булған. Бына ошондай ҙур шәхестәрен һис ҡасан онотмай Ырымбур ере. Халыҡ сәсәненең тыуыуына 130 йыл тулыу айҡанлы уның тыуған ауылында таҡтаташ асыу тантанаһына Башҡортостандан да бер төркөм ҡунаҡтар саҡырып, халыҡты ҙур байрамға йыйҙы ырымбурҙар. Бер көн алда беҙ Ҡәйепҡолда ла булып киттек. Унда Мөхәмәтша Буранғолов уҡытҡан мәктәп һаман һаҡлана, ул, әлбиттә, яңыртылған. Мөхәмәтша Буранғоловтың юбилей сараһына Үрге Ильяс ауылы халҡы бик етди әҙерләнгән. Байрам программаһы "Урал батыр" эпосын сәхнәләштереүҙән башланып китте. "Урал батыр" һынлы "Урал батыр"ҙы сәхнәләштерергә йөрьәт итеүҙәре үҙе ни тора! Милли кейемдәрҙә әҙерләнгән сәхнә күренештәре байрамға ҡот өҫтәне. "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ! Кеше булһын затығыҙ!" тигән юлдар яңынан оло ҡор әләме булып яңғыраны. Ҡотлау һүҙе менән Красногвардейский районы хакимиәте башлығы Николай Валентинович Чернышев сығыш яһаны. Ул Мөхәмәтша Буранғоловтың эшмәкәрлеген ҙурлап, исеме халыҡ хәтерендә мәңге йәшәүен билдәләне. Ырымбур өлкәһе хөкүмәте һәм губернаторы аппаратының эске сәйәсәт идаралығы начальнигы Баҙарғәле Ермәков телмәрендә Мөхәмәтша Буранғоловтың эшмәкәрлегенә генә түгел, ә башҡорт халҡының мәшһүр эпосына ла туҡталды: "Эпослы халыҡ - ул бәхетле халыҡ. Уны мәңгеләштереп, Мөхәмәтша Буранғолов халҡығыҙҙы ла мәңгеләштереп киткән!" - тине. Ысынлап та шулай. "Урал батыр" эпосын башҡорт халҡына мәңгелеккә бирелгән паспорт тип атау ҙа һис хата булмаҫ. Бына шулай, онотолмаҫ тәьҫораттар менән, Ырымбур еренә сикһеҙ рәхмәтле булып ҡайттыҡ беҙ был сәфәрҙән.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БӘПЕСТӘРЕГЕҘҘЕ ИЛАТМАҒЫҘ

Әхирәтем алһыу ҡанатлы, ҡулдарына алһыу гөлләмә тотҡан, зәңгәр болот өҫтөндә баҫып торған бәләкәй генә, бик сибәр фәрештә-ҡыҙсыҡ статуэткаһы бүләк итте. Уны өйгә алып ҡайтып ултырткас, апайымдың дүрт йәшлек ҡыҙы "Был әллә һинең ҡыҙыңмы?" тип һораны. Мин нимә тип яуап бирергә лә белмәй, баҙап ҡалдым.

"Бөтә бәпәйҙәр ҙә, әсәләре килеп алғансы, Хоҙай бабай янында йәшәп тора. Уның янында бәпәйҙәргә рәхәт, тик әсәйҙәр оҙаҡ килмәһә, улар илай башлай. Бына һинең дә бәпесең, әсәйем ҡасан килә инде, тип, илап йөрөйҙөр әле, - тип, ололарҙан ишеткән хәҡиҡәти әкиәтен һөйләп алып китте бәләкәс һеңлем. - Ә бәпестәр һата торған табиптар дауаханала ултыра, әсәйҙәр бәпәй һатып алырға килһә, улар Хоҙай бабайҙан ала ла, кешеләргә бирә. Тик ҡыҙҙар малайҙарға ҡарағанда ҡыйбатыраҡ тора, улар өсөн аҡсаны ла күберәк йыйырға кәрәк. Бәпәй һатып алырға барғанда әсәй янында атай ҙа булырға тейеш, ул булмаһа, Хоҙай бабай бәпәй бирмәй..."

Уйландырҙы балаҡай. "Тормош ауыр, йәшәргә торлаҡ юҡ, тигән булып, төрлө сәбәптәр табып, ғаилә ҡорорға ашыҡмаған йәштәр көндән-көн күбәйә барғанда, әсәләрен һәм аталарын һағынып илаған бәпестәрҙе Хоҙай нимә тип кенә йыуата икән һуң?" тигән һорау килде башыма.

**Дилбәр ХӘКИМОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Йәш ғалимдарға Башҡортостан Республикаһы гранттары тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы. Йыл һайын һәр береһе 1 миллион һумлыҡ 30 грант ҡаралған. Проекттарҙы тапшырыу ваҡыты - 18 ноябргә ҡәҙәр. Уларҙы Башҡортостан Фәндәр академияһы ҡабул итә. Адресы: 450008, Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 15, 201-се бүлмә, телефондар: (347) 272-78-46, 272-78-55.

✓ Башҡортостан Хөкүмәтендә 2019 йылға социаль-иҡтисади үҫеш фаразын һәм бюджет сәйәсәтенең төп йүнәлештәрен тикшерҙеләр. Ултырышты республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров уҙғарҙы. Башҡортостандың финанс министры вазифаһын башҡарыусы Лира Иғтисамова хәбәр итеүенсә, киләһе йыл бюджеты 20 миллиард һум дефицит менән күҙалланған: килем 172,2 миллиард һәм сығым - 192,2 миллиард (быйыл сығым - 186 миллиард).

✓ Республикала һаулыҡ һаҡлауға 74 миллиард һум йүнәлтелә, уларҙан 20 миллиард - тармаҡтың финанс яҡтан тәьмин ителешенә, 7 миллиард - социаль хәүефле ауырыуҙарҙы асыҡлауға һәм дауалауға (туберкулез, ВИЧ, психик һәм наркологик ауырыуҙар), 2 миллиард (2018 йылға ҡарағанда 700 миллионға күберәк) - льготалыларға, шул иҫәптән һирәк ауырыу менән яфаланыусыларға дарыу алыуға, 1 миллиард - мотлаҡ медицина страховкалауҙың төп программаһына инмәгән юғары технологик операциялар башҡарыуға.

✓ Республика Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 99 йыл тулыуҙы билдәләне. Өфөләге Мостай Кәрим исемендәге скверҙа яҙыусыны хәтергә алырға туғандары һәм дуҫтары, уның ижадын үҙ итеүселәр йыйылды. Унда Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров һәм башҡа ҡунаҡтар ҡатнашты.

✓ Республика властары Өфөлә сит ил киноһы аҙналығы барышында Швейцария кинофестивален уҙғарыуға төрлө яҡлап ярҙам күрһәтәсәк. Ошо хаҡта һүҙ барҙы Радий Хәбировтың Швейцарияның Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Ив Россье етәкселегендәге Швейцария Конфедерацияһы делегацияһы менән осрашыуында. Яҡтар сәнәғәт, сауҙа-иҡтисади һәм мәҙәни өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен тикшерҙе.

*ИШАРА*

# АТ ТОЯҒЫ ТАУЫШЫ

## Уны тыңлағанда кемдең йөрәге ҡупҡалйый?

**Хәҙерге ваҡытта төрлө сәбәптәр арҡаһында милләттәштәребеҙҙең ҙур өлөшө башҡа телдәрҙә һөйләшә, уларҙың күптәре үҙ асылынан ситтә, аҙашып йөрөй. Һуңғы йылдарҙа милләттәштәребеҙ дәүләт кимәлендә үткәрелгән сараларҙа шәжәрәһен өйрәнеп, һуңлап булһа ла, үҙ-үҙен таный, асылына ҡайта. Үкенескә күрә, ҡайһылары тамырҙарын тапҡан көйө лә, икенсе милләт вәкиле булыуҙы хуп күреп, үҙ булмышын таныуҙан баш тарта.**



Мин уларға ат тояғы тауышын тыңлап ҡарарға тәҡдим итер инем. Беҙҙең йөрәк ат тояғы тауышына көйләнгән. Көйләнеп кенә ҡалмаған, менәр йылдар һуҙымында ат өҫтөнән төшмәгән аҫабаның йөрәк тибеше менән ат тояғы тауышы бер бөтөнгә әүерелгән. Шуға күрә лә ат тояғы тауышы ишетелеү менән беҙ йыш-йыш тын ала, тулҡынлана башлайбыҙ. Башҡорт бейеүенең төп өлөшөн тәшкил иткән тыпырҙау ҙа (дробь) ат тояғы тауышынан алыныуы юҡҡа түгел. Шуға күрә лә бейеүҙәребеҙ рухты күтәреү, тәбиғәт тарафынан һалынған көстәрҙе уятыу ҡеүәтенә эйә. Мөхәммәт Иҙрисов ағай "Байыҡ" ты бейей башлағанда, йә, кемебеҙ битараф ҡала ине икән?

Билдәле яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаев башҡорт аты менән бәйле ҡыҙыҡлы һәм ғибрәтле бик күп тарихтарҙы һөйләр ине. Был йәһәттән уның көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда Граждандар һуғышынан һуң милли азатлыҡ хәрәкәте етәксеһе Хажиәхмәт Унасовтың һәм уның арҡадаштарының Баймаҡ ҡалаһында урынлашҡан Ҡыҙыл Армия штабына килеүе ваҡиғаһын һөйләүе хәтергә ныҡ уйылып ҡалған. Баштарына папаха кейгән, индәренә чернобурка ябынған, билдәренә ҡылыс таҡҡан, итектәрендә шпорҙары шыңҡылдап торған Унасов һәм егермеләгән һыбайлыларҙың барыһы ла һайлап алынғандай ҡара ҡашҡа аттарға атланып, ҡыҙылдар штабына килеп туҡтай. Һыбайлылар аттарын ҡоймаға бәйләп, штабҡа инә. Шул саҡта унасовсылар менән һөйләшеп килешергә тип саҡырған ҡыҙылдар уларға засада ойоштора, үҙҙәрен ян-яҡтан ҡамап, хыянатсыл рәүештә ҡулға ала...

Ат йәнле кеше булараҡ, ул саҡта Рамаҙан ағайға "Һеҙ һүрәтләгән аттар башҡорт тоҡомло аттар булғанмы?" тигән һорау ҙа биргәйнем. Үҙем белгәнемсә, башҡорт аты күпселектә йә ҡола, йә ерән төҫтә, һыртында юлағы булыуы мотлаҡ ине. Уның артабан аңлатыуынса, башҡорт аты тик бер төрлө генә булмаған, ғөмүмән, халҡыбыҙҙа аттар үрсетеү буйынса селекция эше быуындан-быуынға тапшырыла килгән һөнәр булараҡ, йәшәйешебеҙҙең айырылғыһыҙ һәм мөһим өлөшө һаналған. "Ҡара юрға", "Сыбай ҡашҡа", "Ҡарат" кеүек халыҡ йырҙары юҡтан ғына тыумаған һ.б.

Хәҙер инде белгестәрҙең дәлилдәрен килтерәйек. "Башҡорт аты сығышы менән дала һәм урман яғы тоҡомдарына ҡарай. Ҡырҡыу континенталь климат шарттарында йыл әйләнәһенә көтөүлектә йөрөү хәлендә барлыҡҡа килгән. Башы ҙур, маңлайы киң, муйыны йыуан, ҡыҫҡа, мундаһы түбән, арҡаһы яҫы, тура, арт һаны бер аҙ һалынҡы... Башҡорт аты XVII-XVIII быуаттарҙа киң таралған булған. Өфө, Ырымбур губерналарында үрсетелгән. Пермь, Ҡаҙан һәм Һамар губерналарында осраштырған, Себерҙең почта хеҙмәтендә ҡулланылған. Башҡорт тройкалары ла киң билдәле булған. Улар менән (юлда ял иттермәй һәм ашатмай) 8 сәғәттә 120-140 километр юл үткәндәр. Башҡорт ғәскәре ойошторолғанда башҡорт аты ҡулланылған. Рәсәй алып барған бөтөн һуғыштарҙа урыҫ армияһы башҡорт аты менән тулыландырылған. Башҡорт аты 1812 йылғы Ватан һуғышында юғары баһа алған. Был һуғышта башҡорт һыбайлылары Парижға тиклем һуғыша-һуғыша барып еткән һәм кире әйләнеп ҡайтҡан... Хәрби белгестәр башҡорт атын ҡыйыулығы һәм тәүәккәллеге, тырышлығы һәм идара итеүгә еңеллеге, хужаһына ышаныусанлығы, шулай уҡ оҙаҡ ваҡыт шәп сабып һәм йылдам юрғалап барыуға һәләтлелеге (ә был һыбайлыға мәргән атырға һәм ҡылыс менән оҫта эш итергә мөмкинлек бирә) кеүек сифаттары өсөн юғары баһалағандар.Башҡорттар быңдай йөрөшкә сыҙамлы аттарҙы махсус тәрбиәләгәндәр... Башҡортостандың 21 тоҡомсолоҡ заводында башҡорт аты менән тоҡомсолоҡ эше алып барыла һ.б." ("Башҡортостан". Ҡыҫҡаса энциклопедия. Өфө-1997).

Рамаҙан ағай "Конезавод"тарҙың Башҡорт атлы дивизияһына, ғөмүмән, һуғышҡа аттар әҙерләп биреүе хаҡында күп һөйләне. Бөйөк Ватан һуғышына беҙҙән киткән тик бер ат ҡына Башҡортостанға кире әйләнеп ҡайта алған икән. Тимәк, һуғышҡа ла, башҡа һылтау менән дә башҡорт аттары ил һәм донъя буйынса бик күп таратылған. Һәр хәлдә, күптән инде йәйләүгә сығыуҙан мәхрүм ҡалып, аҡтыҡ аты менән колхозға инергә мәжбүр ителеп, тракторға ултырған башҡорт үҙенең ҡанатлы дуҫының яҙмышын хәл итеүҙән ситләтелгән. Өҫтәүенә, совет власы шәхси хужалыҡта ат тотоуға ла бармаҡ янап тыйҙы. Минеңсә, ҡара сыбай толпарҙарҙың һуңғылары тап шул йылдарҙа юҡҡа сыҡҡандыр.

1977 йылда урта мәктәпте тамамлағас, мин дә ике йыл колхозда эшләп алдым. Үкенескә күрә, ул саҡтағы күпселек колхоз аттары менән Париж, Берлинға барыу түгел, күрше ауылға барып килеү ҙә ауыр мәсьәлә була торғайны. Үҙҙәрен ат тип әйтерлек тә түгел, ә алаша инде. Үҙҙәрен һыбай менеп, йә арба-санаға егеп, ауылдан сығып китермен, тимә, ауыҙлығын тешләп алалар ҙа, әйләнсек һарыҡ шикелле, бер тирәлә әйләнеп тик йөрөйҙәр. Һыртына атланһаң, баштарын аҫҡа баҫып, нисек булһа ла һине эйәрҙән алып ташларға, арбала йә санала ултырып, дилбегә ҡаҡһаң, арт яҡтарын сиҡыртып, һиңә тибергә яҫҡыналар ине.

Ауылдың иң шәп тип һаналған бәйге аттары ла ғәҙәттән тыш ҡыйтыҡ ине. Тиҙ генә өркөп баралар, алып ҡасалар, һыйыр кеүек яндауында торған кешегә ҡабырға яҡҡа тибешәләр. Мин ул саҡта өлкәндәргә шундай һорауҙар бирештерҙем: "Ҡайҙа булған һуң ҡанатлы башҡорт толпарҙары?", "Йылҡы өйөрөндә башҡорт тоҡомло бейәләр тулып йөрөй, ә ниңә уларҙан арғымаҡтар, аҫауҙар тыумай?". Өлкәндәр барыһы ла "эш боҙоусы" өйөр айғырына төртөп күрһәтте. Бәхтиһән, "эш аты" принцибы иң алға ҡуйылған тап шул йылдарҙа беҙҙең бейәләргә Үзбәкстан яғынан һәм Владимир йәк аты айғырҙарын килтереп ҡушҡандар икән. Беҙҙең бейәләрҙе "Лысенко осоро" селекционерҙары көслөк менән башҡаларға "кейәүгә" биргән. Хәйер, тап шул йылдарҙа кешеләр араһында ла интернациональ ғаиләләр ҡороу иң алдынғы ҡараш һаналып, бер нисә быуын милли йөҙһөҙ кешеләр, манҡорттар тыуып өлгөргәйне бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Умартасылар әйтеүенсә, тап шул йылдарҙа башҡорт тоҡомло бал ҡорттарын себер һәм кавказ тоҡомлолар менән яраштырып, яңы тоҡом тыуҙырырға маташҡандар икән. Һөҙөмтәлә, уларҙан тыуған яңы тоҡом тәүге ҡышта уҡ ҡырылып бөткән. Тимәк, ул осор селекционерҙары милләттәр менән генә түгел, бал ҡорттары, аттар менән дә бер үк ҡыйратыу эшен башҡарған була бит.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*




## КҮҘӘТЕҮҘӘР

***69-сы күҙәтеүем.*** Кисә кис супермаркетта 10 йәшлек самаһындағы бер үҫмер һатып алған икмәген магазиндан сыҡҡан урындағы контроль үлсәгескә һалып үлсәне лә: "Мине теүәл 8 грамға алданылар", - тине. "Нимә, икмәгеңдең ауырлығы кәмерәк килеп сыҡтымы әллә?" - тип һораным тегенән. "Юҡ, этикеткала 300 грамм тип яҙылған, ә үлсәгестә 308 грамм", - ти үҫмер. Янына килдем. Ул тағы ла тауарын күҙем алдында үлсәп күрһәтте. Мин уға: "Һинең файҙаға бит, 8 грамға оттоң, ниңә ҡайғыраһың?" - тием. Әммә үҫмер һис тә бирешергә теләмәйенсә: "Юҡ, мин алдандым", - тине лә, китеп барҙы.

...Оҙаҡ уйландым. Ә бит үҫмер дөрөҫөн әйтте. Кем белә, бәлки, ул тәүге тапҡыр ошондай хәлгә тарып, күңеле менән быны ҡабул итергә теләмәйенсә, күңел ихтилалы кисергәндер. Кеше бит ошо рәүешле алданырға һәм алдашырға өйрәнә...

***70-се күҙәтеүем.*** Бала саҡтан бер күренешкә аптырап торғайным. Эттәр һәм бесәйҙәр ауырыған саҡта ашамай, һыу эсмәй. Ҡаҡ һөйәккә ҡалғансы һуҙылып яталар ҙа, аҙаҡ, бер ни булмағандай, аяҡҡа баҫып китәләр. Ураҙамдың 72-се көнөндә (был юҡҡа ғына түгелдер) хайуандарҙың был халәте исҡә төштө. Чекмарев һымаҡ "быҙауҙарҙың зәңгәр күҙҙәренә" ғашиҡ булыусы зоотехник дуҫым, шағир Дамир Шәрәфетдинов миңә был хәлде шулай аңлатты: ураҙа ваҡытында тере йәнгә тәбиғәт тарафынан һалынған иммунитет уяна, тере йәндең "үҙ докторы" эшмәкәрлек итә башлай. Беҙ, кешеләр генә, тәбиғәттән алыҫлашыуыбыҙ арҡаһында был хәҡикәтте онотҡанбыҙ. Быңа һиңә кәрәкһә!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республиканың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты хәбәр итеүенсә, муниципалитеттарға 2018 йылдың 10 ноябренә тиклем ведомстволға инженер инфраструктураһы объекттарын Башҡортостан Республикаһының инвестиция программаларына индереүгә гариза йүнәлтергә кәрәк. Биләмәнең генераль планына, планлаштырыу проектына һәм межалауға ингән объекттар финанслау аласаҡ.

✓Бөгөн Төрөк Республикаһының Мугла провинцияһында умартасылыҡ һәм ҡырағай бал буйынса VI халыҡ-ара конгресса Башҡортостан Республикаһы Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге ҡатнашты. Сара йомғаҡтары буйынса Башҡортостан юғары наградаға - конгрестың Гран-приһына лайыҡ булды.

✓Быйыл 10 айҙа Башҡортостанда пенсия түләүгә Пенсия фонды сығымдары 174 миллиард һум тәшкил иткән. Башҡортостанстаттың 2018 йылдың июленә биргән мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала пенсионерҙар һаны бер йылда 1,5 процентҡа артҡан һәм 1,186 миллион кешегә еткән. Күбеһенсә ул ҡартлыҡ буйынса страховка пенсиялары алған кешеләр (995,2 мең кеше).

✓Ноябрь башында рәсәйҙәрҙе бер юлы өс ял көнө көтә. Илдең хеҙмәт кодексына ярашлы, 4 ноябрь - Халыҡтар берҙәмлеге көнө - эшләмәгән байрам көнө. 2018 йылда байрам йәкшәмбегә тура килә, шуға ял көнө дүшәмбегә, 5 ноябргә, күсерелә. Шулай итеп, рәсәйҙәр 3, 4 һәм 5 ноябрь ял итә.

✓ Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында танылған башҡорт шағиры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре һәм сәнғәт эшмәкәре Яҡуп Ҡолмойҙоң тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы хәтер кисәһе уҙҙы. Сараны ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы булышлығында республика Яҙыусылар союзы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы.

✓4 ноябрҙә Башҡортостандың мәҙәниәт учреждениеларында Халыҡтар берҙәмлеге көнөнә арналған Сәнғәт төнө уҙа. Традицион акцияға республика музейҙары, күргәҙмә галереялары, театрҙары, китапханалары һәм клубтары ҡушыла. Акцияның программаһында - яҙыусылар, рәссамдар, актерҙар һәм музыканттар менән осрашыуҙар. Ойоштороусылар үҙенсәлекле саралар вәғәҙәләй.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҪКӘРТЕҮ КӘРӘК!

✓ **Радий Фәрит улы белем биреү учреждениеларында хәүефһеҙлекте тәьмин итеүгә арналған терроризмға ҡаршы комиссия ултырышы уҙғарҙы.** "Яңыраҡ Керчта булған фажиғә бөтәбеҙ өсөн ҡурҡыныс һабаҡ һәм уны булдырмау кәрәклеге тураһында иҫкәртеү булды, - тип һөйләне Радий Хәбиров. - Беҙ үҙебеҙ өсөн һығымта яһарға, шул иҫәптән республикабыҙҙа ошондай фажиғә булмаһын өсөн саралар күрергә тейеш. Бындай осраҡ, ҡыҙғаныҫка күрә, быйыл Стәрлетамаҡ мәктәбендә булды. Шуға был йәһәттән проблемалы төбәктәр исемлегенә инеүебеҙҙе аңларға тейешбеҙ..." Төбәк етәксеһе бөгөн белем биреү ойошмаларының өҫтән бер өлөшөндә тиерлек, ә ул меңдән ашыу, видеокүҙәтеү системаһы булмауын билдәләп, мәғариф учреждениелары етәкселәренә өҫтәмә хәүефһеҙлек саралары ҡабул итергә, үткәреү режимын көсәйтергә, персоналды ҡәтғи рәүештә баһаларға ҡушты. "Шулай уҡ урындағы үҙидара органдары менән балалары булған, атыу, травматик һәм башҡа ҡоралдар теркәлгән ғаиләләр исемлеген әҙерләүегеҙҙе һорайым. Урындарҙа мәғариф бүлектәре ошондай мәғлүмәтте белергә, ә урындағы участковыйҙар ата-әсәләр менән ҡорал һаҡлау мәсьәләләре буйынса иҫкәртеү эштәре алып барырға тейеш тип иҫәпләйем", - тип һығымта яһаны төбәк Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы.

✓ **Дәүләт Йыйылышының даими нигеҙҙә эшләүсе етәкселеге һәм депутаттар менән осрашыуҙан һуң Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров республиканың алтынсы саҡырылыш парламентының икенсе пленар ултырышында сығыш яһаны.** "Дәүләт Йыйылышы депутаттарына үҙҙәренең парламент контроле хоҡуғы менән әүҙем ҡулланыу шарт. Һеҙҙең майҙансыҡ вайымһыҙ етәкселәр өсөн ниндәйҙер Голгофа булырға тейеш, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров. - Һеҙ округтарығыҙ мәнфәғәте менән йәшәргә тейеш. Республика парламентында электрон ҡабул итеү бүлмәһе булдырырға кәрәк. Унда һәр депутаттың үҙ почтаһы булырға тейеш, уларға һайлаусылары үҙ проблемалары тураһында яҙа ала. Әгәр яҙмайҙар икән, тимәк, улар һеҙгә ышанмай". Яңы етәксе депутаттар йөҙөндә республиканың башҡарма власть органдары менән һөҙөмтәле үҫеш өсөн яуаплылыҡты уртаҡлашырға әҙер партнерҙар күрергә теләүен билдәләне һәм Дәүләт Йыйылышы етәкселеген республика Хөкүмәте эшенә әүҙемерәк ҡушылырға, кәңәшмәләрҙә ҡатнашырға һәм теге йәки был мәсьәләләр буйынса һайлаусыларҙың фекерен еткерергә саҡырҙы.

✓ **Радий Хәбиров алданған өлөшсөләрҙең проблемалары буйынса кәңәшмә үткәрҙе.** Төбәк етәксеһе хәлде шәхси контролдә тотасағын һыҙыҡ өҫтөнә алып, алдағы ике аҙнала һәр объект буйынса эштәрҙең көнүҙәк планграфигын күрһәтергә, ә ай ярымдан финанс схемаларын расларға ҡушты, хоҡуҡ һаҡлау органдары ла был эшкә ҡушылырға һәм төҙөүселәр эшенең законлылығын өйрәнергә тейеш, тип билдәләне. Билдәле булыуынса, "Миловка паркы" (төҙөүсеһе "КилСтройИнвест" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте), "Көмөш шишмә" (төҙөүсеһе "Крона"), "Яңы Булгаков" ("СтройВертикаль") торлаҡ комплекстары, Өфөнөң Әхмәтов урамындағы һәм Нефтекаманың 25в-се биҫтәһендәге йорттар ("Интеграл" акционерҙар йәмғиәте) иң ҙур проблемалы объекттар булып тора. Зыян күргән граждандарҙың 50 проценттан ашыуы ошо объекттарға тура килә.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# КЕМДӘР КИТТЕ, КЕМДӘР КИЛДЕ?

**Радий Фәрит улы Хәбиров Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы вазифаһына тәғәйенләнгән тәүге көндәрҙә үк барыһын да ҡыҙыҡһындырған "Уның командаһында кемдәр ҡалыр, кемдәр китер?" тигән һорауға: "Минең командала булыу бик ябай. Ни бары кешеләрҙең ҡайғыһын уртаҡлашырға, уларҙы борсоған мәсьәләләрҙе белергә һәм шуларҙы хәл итергә теләк кенә кәрәк..."- тип яуаплагайны. Һәм бер үк ваҡытта ғәмәлдәге команда менән эшләргә ниәтләнеүен дә инҡар итмәне һәм урындағы кадрҙар потенциалын "юғары" тип баһаланы. Ә шулай ҙа яңы етәксе үҙ талаптарына яуап бирерҙәй ағзаларҙы үҙ командаһына туплауҙы оҙаҡҡа һуҙманы.**

● Башҡортостан Хөкүмәте етәкселеге Премьер-министр Рөстәм Мәрҙәнов етәкселегендә төбәк башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусыға отставкаға сығыу үтенесе менән мөрәжәғәт итте. Был хаҡта Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә белдерҙе һәм: "Мин Рөстәм Хәбиб улын Премьер-министр сифатында эшен дауам итеүен һораным. Һигеҙ вице-премьерҙың отставкаһын ҡабул иттем. Ошо тәплә уйланылған ирҙәрсә ҡарар уларҙың өлгөргән етәксе булыуын күрһәтә. Әгәр улар үҙҙәренең тәжрибәһен һәм һөнәри оҫталығын артабан ҡулланырға теләһә, үҙ урындарын табыр", - тине.

Өс вице-премьер үҙ вазифаларын ваҡытлыса башҡарыуҙы дауам итә. Улар - Илшат Тажетдинов (Хөкүмәт аппараты етәксеһе), Илшат Фәйзрахманов (ауыл хужалығы өсөн яуаплы) һәм Фәрхәд Самедов (республиканың Мәскәүҙәге тулы хоҡуҡлы вәкиле).

Отставкаға киткән ҡайһы бер вице-премьерҙар урынына яңылар тәғәйенләнде. Башҡортостан Хөкүмәтендә төҙөлөш блогы өсөн яуаплы яңы вице-премьер - Рәиф Әбдрәхимов, ул күп йылдар Өфөләге "Инвестиция-төҙөлөш комитеты"н етәкләй, ә һуңғы ваҡытта Радий Хәбировтың командаһында - Красногорск хакимиәте башлығының архитектура һәм төҙөлөш мәсьәләләре буйынса урынбаҫары булып эшләй. Ул уҙған йылдың декабренән вице-премьер вазифаһын биләгән Андрей Труханды алмаштырҙы.

Быға тиклем ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры булып эшләгән Ленара Иванова Башҡортостан Хөкүмәтендә социаль өлкә өсөн яуаплы вице-премьер итеп тәғәйенләнде. Унан алда был вазифаны 2014 йылдың декабренән Салауат Сәғитов биләне. Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры вазифаһын башҡарыусы итеп Юрий Мельников тәғәйенләнде.

Башҡортостанда тыуып үҫкән полиция генерал-лейтенанты Артур Әхмәтханов көс структуралары менән эш өсөн яуап бирген, хәүефһеҙлек мәсьәләләре, хоҡуҡ боҙоуҙарға ҡаршы көрәш һәм мобилизация әҙерлеге менән шөғөлләнгән вице-премьер итеп тәғәйенләнде.

Шулай уҡ 2016 йылдың ноябренән Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығын етәкләгән Евгений Гурьев Хөкүмәт премьер-министры урынбаҫары вазифаһынан бушатылды. Уның вазифаһын вице-премьер статусынан тыш Олег Полстовалов биләне.

2012 йылдың октябренән вазифа биләгән Марат Мәһәҙиевтың һәм сентябрҙә вице-премьер итеп тәғәйенләнгән Фәнзил Сыңғыҙовтың эштән китеүе тураһында иғлан ителде.

● Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп тәғәйенләнгәндән һуң тәүгеләрҙән булып 2014 йылдан һаулыҡ һаҡлау министры булған Әнүәр Бакиров отставкаға китте. Ведомство башлығы вазифаһын ваҡытлыса Рафаэль Яппаров башҡара.

● Шулай уҡ уҙған аҙнала Ринат Шәғәлин төбәк башлығының эштәр идарасыһы вазифаһынан бушатылды, вазифаны ваҡытлыса башҡарыусы итеп Гүзәл Насирова тәғәйенләнде.

● 2016 йылдан РФ Дәүләт Думаһының торлаҡ сәйәсәте һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары вазифаһын биләгән Александр Сидякин Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде.

● 2007-2008 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының финанс министры урынбаҫары, артабан Рәсәй Федерацияһы Президентының Эске сәйәсәт буйынса идаралығында эшләгән Ринат Бәширов Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде.

● Башҡортостандың Әбйәлил районында яңы хакимиәт башлығы тәғәйенләнде. Райондың депутаттар Советы ҡарары буйынса муниципалитетты хәҙер 2018 йылдың сентябрендә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаты булып һайланған "Яҡтыгүл" шифаханаһы директоры Илдар Нафиҡов етәкләй.

● Әлфир Сабиров Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. 2014 йылдың ғинуарынан әлегә ҡәҙәр ул Ҡырмыҫҡалы район Советы секретары вазифаһын биләне.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был исемлек әле дауам итәсәк. Республика халҡы быға тиклем Башҡортостанда аңлашылмаған кадрҙар сәйәсәте алып барылыуын, етешһеҙлектәрҙе, хаталарҙы, социаль ғәҙелһеҙлекте тап ана шул вазифаһына тап килмәгән, халыҡтың йәшәйешен, тын алышын, уның ихтыяжын, менталитетын белмәгән етәкселәр атҡарған икәнен яҡшы белә. Шуға ла улар Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улының был мәсьәләне лә яйға һалырына, уның командаһына ысынлап та Башҡортостан Республикаһының артабанғы үҫешенә һәм уның халҡының тормошон яҡшыртыуға булышлыҡ итәсәк булдыҡлы, илһөйәр кешеләр тупланасағына ышана.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә "Салауат Юлаев" һәм СКА араһында ныҡ һөҙөмтәле булмаһа ла, мауыҡтырғыс уйын килеп сыҡты. Был ярышташтарҙың Континентал хоккей лигаһының 11-се миҙгеле сиктәрендә икенсе осрашыуы булды, унда "юлаевсылар" еңеү яуланы. Киләһе уйынды "юлаевсылар" 28 октябрҙә үҙ боҙонда Мәскәү өлкәһенең "Витяз"е менән уҙғара.

✓Өфөлә Конгресс-холл янындағы һәм В.И.Ленин исемендәге майҙандарҙы Яңы йылға биҙәү өсөн 17,8 миллион һум аҡса йүнәлтеү күҙаллана. Эштәр ҡала бюджетынан финанслана. Подрядсыны билдәләү буйынса аукцион 6 ноябрҙә була. Монтаж эштәрен 23 декабргә тамамлау, боҙ ҡаласығын 2018 йылдың 23 декабренән 2019 йылдың 26 февраленә тиклем тәртиптә тотоу, 2019 йылдың 27 февраленән 1 мартына тиклем алып ташлау ҡаралған.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында йыл һайын ойошторолған "Туристик Өфө" конкурсы уҙа. Унда үҙҙәренең экскурсия маршруттарын тәҡдим иткән һәм яҡлаған эшләүсе экскурсоводтар, юғары һәм урта махсус белем биреү йорттары студенттары, өлкән класс уҡыусылары ҡатнаша. Конкурстың финал этабы 30 октябрҙә Башҡортостандың Милли музейы буйлап экскурсия формаһында уҙа.

✓Төбәк Хеҙмәт министрлығы киләһе йылға эш календарын баҫып сығарҙы. Башҡортостанда 2019 йылда байрам һәм ял көндәре менән бергә 121 эшләмәгән көн иҫәпкә алынған. Биш көнлөк эш аҙнаһында Башҡортостан халҡы 244 көн эшләй. Иң күп ял көндәре ғинуарға һәм майға тура килә - 14 һәм 13 көн. Мосолмандарҙың Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдары 2019 йылда 4 июнгә һәм 11 августҡа тура килә.

✓Быйыл Башҡортостанда көҙгө каникулдар 1 көнгә оҙағыраҡҡа һуҙыла, сөнки улар дәүләт байрамы менән тура килә. Балалар 28 октябрҙән 5 ноябргәсә ял итә. Икенсе сиректә тәүге ҡыңғырау 6 ноябрҙә яңғырай. Башланғыс класс уҡыусылары уҡыу йылында 35 көн (йәйге каникулдарҙы иҫәпләмәгәндә) ял итә, өлкән кластар - 30 көн.

✓Бер нисә көн элек Башҡортостандың Благовар районы Һынны ауылында ҡырағай төлкөләр кешеләргә һөжүм итергә маташҡан. Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығында әйтеүҙәренсә, ауыл биләмәһендә ҡырағай йәнлектәр күренгән осраҡта хайуандар донъяһы объекттарын файҙаланыуҙы күҙәтеү һәм һаҡлау бүлеге инспекторына 8 (347) 218-04-30 телефоны буйынса хәбәр итергә кәрәк.

✔ ***Халыҡты йәмәғәт транспорты менән тәьмин итеүҙең сифаты яҡшырғансы быңдай осрашыуҙар аҙна һайын ойоштороласаҡ. Әле булған транспорт паркын алыштырыу һәм ҙур һыйҙырышлы автобустарҙы арттырыу бурысы ла тора.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Өфө ҡалаһында пассажирҙарҙы ташыу йүнәлешендә комплекслы эштәр башланды. Һөҙөмтәлә һуңғы көндәрҙә ҡайһы бер маршруттар буйлап автобустар рейсҡа сыҡманы һәм өфөләргә ҡала буйлап хәрәкәт итеү ҡайһы бер ауырлыҡтар тыуҙырҙы. Эшмәкәрлеген законһыҙ алып барыусыларҙы, күрәһең, күп һанлы тикшереүҙәр, штрафтар, хатта транспорт сараһына арест һалыныу мөмкинлеге ҡурҡыта. Ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы ултырышты ла Салауат Хөсәйенов ошо теманан башланы. "Йәмәғәт транспорты менән килеп тыуған ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар өсөн граждандар алдында ғәфү үтенәбеҙ, был етешһеҙлектәр йәйләп төҙәтеләсәк", - тине Салауат Сәхи улы һәм ҡаланың Транспорт һәм элемтә идаралығына пассажирҙар йөрөтөүсе автотранспорт водителдәре менән эште дөрөҫ ойоштороуҙы талап итте.**

# МӘКТӘПТӘРҘӘ...

## уҡыйҙар ҙа, туҡланалар ҙа, дауаланалар ҙа

Ул шулай уҡ кадрҙар үҙгәреше тураһында ла хәбәр итте. Өфөнөң инвестиция-төҙөлөш комитеты директоры вазифаһына Марат Вәсимов тәғәйенләнде. Ә "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы коллективын хәҙер быға саҡлы Өфө пассажирҙар ташыусы автотранспорт предприятиеһы директоры вазифаһын биләгән Надир Сәмиев етәкләйәсәк.

Транспорт темаһы артабанғы һөйләшеүҙә лә дауам итте. Билдәләнеүенсә, бөгөн ҡаланың пассажирҙар транспорты селтәрендә 150 маршрут иҫәпләнә, уларҙың 34-е социаль автобус маршруты, 82-һе коммерция автобус маршруты, 12 трамвай һәм 22 троллейбус маршруттары. Көн һайын ҡала урамдарына 3150 пассажир транспорты сыға. Әммә законһыҙ рәүештә был эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүселәр ҙә күп. Улар был эшкә рөхсәт биреүсе "маршрут картаһы"н алмайынса ғына пассажирҙар йөрөтә. Тап ошо күренеш билдәләнгән хәрәкәт схемаһын, рейстар араһындағы ваҡыт интервалын боҙа һәм тукталыштарҙа тығындар барлыҡҡа килтерә лә инде. Ундайҙарҙы таныу еңел: бындай "йүнселдәр" башлыса аҙ һыйҙырышлы транспорт төрөнән торған автобустарҙа ҡаланың төп урамдары буйлап пассажирҙар ташып аҡса эшләй. Был аҙна башынан Өфөлә үткәрелгән рейд ошондай һығымталар яһарға мөмкинлек бирә лә инде. Транспорт һәм элемтә идаралығы етәксеһе Андрей Федосов билдәләүенсә, халыҡты йәмәғәт транспорты менән тәьмин итеүҙең сифаты яҡшырғансы бындай осрашыуҙар аҙна һайын ойоштороласаҡ. Йәйләп маршрут селтәре оптималләштереләсәк, әле булған транспорт паркын алыштырыу һәм ҙур һыйҙырышлы автобустарҙы арттырыу бурысы ла тора. Әле урамдарҙа хәрәкәт итеүсе "Башавтотранс" предприятиеһының 260 автобусы, 80 трамвай һәм 110 троллейбустан тыш, ҡалған йәмәғәт транспорты бәләкәй кластағы автобустар. Ундайҙарҙың иҫәбе - 2,7 мең. Оптималләштереүҙән һуң яҡынса 1,4 мең автобус һәм 200 электр транспорты ҡалырға тейеш.

Артабан оператив кәңәшмәләге һөйләшеү мәктәптәрҙә уҡыусы балаларҙың туҡланыуын ойоштороуға арналды. Ҡаланың Эшҡыуарлыҡ, ҡулланыусылар баҙары һәм туризм буйынса идаралығы етәксеһе Луиза Макшукова әйтеүенсә, бөгөн 128 мәктәптә 116 мең уҡыусы белем ала. Уларҙың 95 проценты мәктәптә ашарға теләк белдергән, бының менән 3 туҡланыу операторы шөғөлләнә. Операторҙар үҙ сығымдары иҫәбенә өлкән кластар өсөн кафе тибындағы туҡланыу зоналары булдырған. Технологтар яңы блюдолар уйлап тапҡан. Мәктәп ашханаларында бар ризыҡ та Роспотребнадзор тарафынан расҡланған, унда балаларҙың сәләмәтлегенә зыян килтереүсе чипсылар, газлы эсемлектәр, майонезлы салаттар һатылмай. Белем биреү системаһындағы яңы стандарттар буйынса, мәктәптәрҙең бер сменалы графикка күсеүе һөҙөмтәһендә иҫке мәктәптәрҙең ашханаларына балаларҙың барыһы ла һыймай. Тәнәфестең ҡыҫҡа булыуы, сираттар һөҙөмтәһендә күп балалар ашап өлгөрмәй. Шуға ла әле ҡаланың Мәғариф идаралығы менән берлектә ашау өсөн тәғәйенләнгән мәлдә тәнәфестәрҙе оҙайтыу мәсьәләһе тикшерелә. Әммә балаларҙың барыһы ла сәләмәт туҡланыуға өстөнлөк бирмәй, быны һорау алыуҙар күрһәтә. Шуға ла хәҙер сәләмәт туҡланыу мәҙәниәтен формалаштырыу буйынса системалы эш алып барырға кәрәк, ти белгестәр.

Өфөнөң балалар баҡсалары һәм мәктәптәрендә медицина кабинеттары асыу мәсьәләһе лә тикшерелде ултырышта. Ҡала хакимиәтенең Халыҡ сәләмәтлеген һаҡлау бүлеге етәксеһе Рәдиф Сабиров әйтеүенсә, 128 дөйөм белем биреү учреждениеһының барыһында ла тиерлек бындай кабинеттар бар. Балаларға медицина хеҙмәтләндереүе күрһәтеү буйынса уртаҡ эшмәкәрлек алып барыу өсөн Димдә райондың ҡала клиник дауаханаһы, Калинин районында 4-се, Киров районында 2-се, Ленин районында 6-сы, Октябрь районында 5-се, Совет районында 3-сө балалар поликлиникалары, Орджоникидзе районында 17-се ҡала клиник дауаханаһы менән килешеүҙәр төҙөлгән. Бөгөнгө көндә ҡаланың белем биреү учреждениеларына 62 табип һәм 87 шәфҡәт туташы беркетелгән...

Ултырышта шулай уҡ Ленин районы хакимиәте башлығы Дмитрий Масютин сығыш яһаны һәм биләмәләге ихаталарҙы төҙөкләндереү тураһында һөйләне. Ихаталар төҙөкләндерелә икән, тимәк, уларҙа балалар һәм спорт майҙансыҡтары төҙөлә, иҫкергән ағастар ҡырҡыла, өҫтәмә рәүештә парковка урындары барлыҡҡа килә һәм законһыҙ урынлаштырылған металл гараждар һүтелә. Бөгөн Өфөбеҙҙең бар райондарында ла алып барыла был эштәр һәм ҡала хакимиәте башлығы эргәһендәге һәр ултырышта был хаҡта ла отчет бирелә. Бына был юлы иһә ул эштәрҙең Ленин районында бик әүҙем атҡарылыуы тураһында ишеттек.

Әйткәндәй, 23 октябрҙә республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың йәмәғәт транспорты менән бәйле хәлдә ҡаты тәнҡитләүенә һәм күләмле рейдтар башланыуына яуап итеп, Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта законһыҙ пассажир ташыусыларҙың забастовкаһы уҙҙы. Икенсе көндө уҡ, Хәбировҡа һәм уның Хакимиәтенә шантаж юлы менән тәьҫир итергә маташҡандан һуң, улар Башҡортостан Хөкүмәтенә һөйләшергә килде һәм забастовканы туҡтатып, маршрутҡа сығырға әҙер булыуҙары хаҡында белдерҙе. Ләкин уларҙың мөрәжәғәте кире ҡағылды һәм ноябрҙә пассажир маршруттарын бүлеү буйынса берҙәм конкурста ҡатнашырға тәҡдим ителде. Шуны билдәләп үтәйек: өҫтәмә транспорт берәмектәрен йәлеп итеү забастовка эҙемтәләрен бөтөрөргә мөмкинлек бирҙе, хәҙер ҡалала пассажирҙарҙы йәмәғәт транспортында йөрөтөүгә бәйле ҡыйынлыҡтар юҡ. Әлегә ҡайһы бер чиновниктар проблемаларҙы өйрәнеү өсөн үҙҙәре автобуста йөрөй башланы.

---

*БАШ ЙОРТТА*



# БАЛАЛАР БӘЙГЕ ТОТА!

**Башҡортостандың баш ҡалаһы 2019 йылғы Халыҡ-ара йәйге балалар уйындарының баш ҡалаһы буласаҡ һәм 35 илдән 1,5 мең спортсыны ҡабул итәсәк.**

Әле баш ҡала ярыштарға әҙерләнә: трансферҙар маршруттары, виза ярҙамы, финанслау, аккредитация, урынлаштырыу, хәүефһеҙлек, медицина тәьминәте, тантана ойоштороу программалары ентекләп өйрәнелә. "Халыҡ-ара балалар уйындарының рәсми сайты эшләй башланы. Уйындар яңылыҡтары шулай уҡ социаль селтәрҙә баҫыла", - тип хәбәр итә ойоштороусылар. Әле дзюдо, баскетбол һәм пляж волейболы буйынса ярыштар уҙасаҡ бер нисә спорт объекттарын реконструкциялау бара.

Шулай уҡ ойоштороусылар социаль селтәрҙә 2019 йылғы Халыҡ-ара балалар уйындарына ирекмәндәр йыйыуға төркөм асты. "Алдағы айҙарҙа спорт сараһына унайлы һәм байрам мөхитен булдырыуҙа ярҙам итәсәк ирекмәндәр төркөмөн ойоштороу күҙаллана", - тип билдәләй улар. Башҡортостандың баш ҡалаһы ҡунаҡтары өсөн мәҙәни программа әҙерләнә. Уның ярҙамында башҡа илдәрҙән килгән балалар һәм өлкәндәр Башҡортостан һәм уның милли колориты менән танышасаҡ. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, еңел атлетика һәм футбол буйынса ярыштарҙы Өфөнөң "Нефтсе" стадионы ҡабул итә, йөҙөү һәм фехтование буйынса ярыштар - Ҡамышлы урамы буйынса төҙөлөп ятҡан үҙәктә, пляж волейболы һәм баскетбол буйынса - "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында, грек-рим көрәше буйынса - "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы спорт залында, ҡаяға үрләү буйынса - "Ватан" паркында, дзюдо буйынса Баязит Бикбай урамындағы 32-се спорт мәктәбендә буласаҡ. Ябыу тантанаһы "Ватан" паркының түбәнге майҙансығында уҙасаҡ.

Әйткәндәй, Өфө 2011 йылдан Халыҡ-ара балалар уйындарының даими ҡатнашыусыһы булып иҫәпләнә. 2013 йылда республиканың баш ҡалаһы ошо күмәк спорт ярыштарын ҡабул иткәйне.

**Әйткәндәй, 2 һәм 3 ноябрҙә Өфөлә "Динамо" стадионында СССР-ҙың атҡаҙанған тренеры В.А.Борман иҫтәлегенә грек-рим көрәше буйынса XXXIII Бөтә Рәсәй турниры уҙғарыла. Унда илдең 100-ҙән ашыу көслө спортсыһы ҡатнаша, улар иҫәбендә донъя беренселеге еңеүсеһе Ислам Опиев, Рәсәй беренселеге финалсылары бер туған Вәлитовтар бар. Турнирҙың почетлы ҡунаҡтары - Олимпия уйындары чемпиондары һәм призерҙары.**

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәккә

❖ Кем бакса үҫтерә, күргәне барҙыр, таш ҡабаҡтың (кабачки) тышы берәй нәмәгә төртөлөп, зарарланһа, шул урында "йәш" бөртөгө барлыҡҡа килә. Аҙаҡ ул ылыҫлы ағастарҙың сайыры кеүек ҡатып китә. Бына ошо "күҙ йәше" дауалау сифатына эйә, уның шифаһын алоэ һуты менән генә сағыштырырға мөмкин. Иң тәүҙә йөрәк сирлеләр уға иғтибар итһен ине. Ул көс-дарманды арттыра, шлактарҙы сығара. Йөрәк етешмәүсәнлеге (йөрәктең ағзалары ҡан менән тәьмин итә алмауы) мәлендә унан да яҡшыраҡ дауа таба алмаҫһығыҙ. Үткер бысаҡ осо менән йәш таш ҡабаҡтың тиреһенә сәнсеп сығығыҙ. Ҡатҡан сыйырҙы бысаҡ менән ҡырып алаһың һәм "Валидол" кеүек тел аҫтына һалаһың. Тын алыу яҡшыра, нервылар тыныслана, йөрәк тибеше тигеҙләнә.

### Цистит

❖ Һуғанды турап, быяла банканың яртыһына тиклем тултырырға. Банка тулғансы араҡы ҡойорға һәм 10 көн төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан алда 1 ҡалаҡ ҡабул итергә. Дауаланыу курсы - 3 аҙна.

### Ҡауаҡ

❖ Сәсте йыуыр алдынан баш тиреһенә һуған һуты һөртөп, 1 сәғәт торорға. Яҡшылап йыуырға. Бер нисә тапҡыр ҡабатлағандан һуң, ҡауаҡ юҡҡа сығыр.

### Үксә ярылғанда

❖ Төнгөлөккә үксәгә иретелгән эс майы (туң май) һөртөп, яҡшылап урап, өҫтөнөнән кизе-мамыҡ ойоҡ кейеп йоҡларға.

### Йыйырсыҡтарҙан

❖ 1 ҡалаҡ календула сәскәләренә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм бит тиреһенә һөртөргә. Һәр ваҡыт яңы төнәтмә әҙерләп, көнөнә 3-4 тапҡыр эшләргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

**✓ Тәү сиратта, йәш белгестең эшкә маһирлығы юҡ. Икенсенән, хеҙмәт баҙары нәҡ һин һайлаған һөнәр эйәләре менән тулған, өсөнсөнән, күп осраҡта эш биреүсе дипломыңа өстәп, 3 йыл хеҙмәт стажы талап итә.**



## ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ



*Константин УШИНСКИЙ*

# ТӘРБИӘ НИГЕҘЕ...

## ғаиләлә һалына

**Бәләкәй сағында үҙ әсәйенән төплө белем һәм һәйбәт тәрбиә алған рус педагогы Константин Ушинский шундай һығымтаға килә: бала башланғыс төп нигеҙҙе, аң һәм әхлаҡи тәрбиәне өйҙә, педагогик белемгә эйә һәм әҙерлекле булған Әсәнән ала. Балаларҙы сит илдәргә ебәреп уҡытыу һәм тәрбиәләү өстөнлөклө, маҡтаулы һаналғанлыҡтан, заманында бөйөк педагог йәне әсеп һәр баланың үҙ мөхитендә тәрбиәләнергә һәм белем алырға тейешлеге тураһында яҙа. Әлбиттә, ул үҙ урыҫ халҡының тәрбиәһенә туҡтала. Әммә уның яҙғандары һәр милләткә лә ҡағыла. Уның "урыҫ ҡатындары", "урыҫ ғаиләһе", "урыҫ мөхите" тип яҙғандарын һәр милләт вәкиле үҙ милләтенә ҡайтарып аңларға тейеш. Уҡыусыларыбыҙға Константин Ушинскийҙың тәрбиә тураһындағы мәҡәләләрен тәҡдим итәбеҙ.**

Беҙҙә башланғыс белемде һәм тәрбиә нигеҙҙәрен өйҙә башлау ғәҙәткә ингән, һәм Алланан был йүнәлештең таралыуын, камиллашыуын ғына һорайһы ҡала.

Сит илдәрҙә бәләкәй балалар өсөн асылған мәктәптәрҙе күргәндән һуң, шундай һығымтаға килдем: бала, һис юғы 8-10 йәшкә тиклем, тәрбиәне һәм белемде өйҙә алырға тейеш, мәктәптәрҙә уҡытҡан сүрәттә лә, мәктәп мөхите өйҙәгенекенән айырылмаҫҡа тейеш. Шул саҡта ғына мәктәптә уҡытыу һөҙөмтәле буласаҡ.

Байтаҡ ҡына илдәрҙә булғандан һуңғы һығымталарымдан сығып, шуны әйтә алам: сит илдә балаларҙы тәрбиәләү һәм белем биреү эше яҡшы ойошторолған. Әммә тәрбиә эшендә көнө буйы ауыр хеҙмәт менән мәшғүл булған әсәнең генә түгел, хатта мөмкинлеге булған әсәләрҙең ҡатнашмауын дөрөҫ түгел тип һанайым. Шуныһы ғәжәп: уларҙа хатта ҡатын-ҡыҙ тәбиғәтенә хас булған педагогик йүнәлеш тә үҫешмәгән.

Был хәлдең сәбәптәрен төпсөнөп тормайынса, шуны әйтке килә: урыҫ әсәләре үҙ балаһына тәү белем биреү һәм һәләтен үҫтереү менән шөғөлләнеү кинәнесен, үтә мохтажлыҡ булмаһа, башҡа бер кемгә лә бирмәһен ине. Ҡатын-ҡыҙҙа бала тәрбиәләү һәм белем биреү һәләте тыумыштан килә.

Мин быны дөрөҫлөгөнә инанғанмын. Әгәр байтаҡ ҡына әсәләрҙең үҙ балалары менән шөғөлләнергә теләге ҙур булып та, был эште мәктәп йәки икенсе кеше ҡарамағына ҡалдыра икән, был инде уларҙың балаға тәү белем биреүгә әҙерлекһеҙ икәнлеген аңлата.

**(Дауамы бар).**

## КӨНАУАЗ

**Бер нисә тиҫтә йыл элек медицина, педагогия, нефть һәм ауыл хужалығы институттары иң абруйлы юғары уҡыу йорттары булды. Ә инде мәктәп тамамлаусыларға унда уҡып, һөнәр алыу ҙур мәртәбә һаналды. Бөгөн иһә һөнәрҙәрҙең ниндәйе генә юҡ. Хеҙмәт баҙарында 50 меңдән ашыу һөнәр бар тип белдерә белгестәр. Уларҙың күптәренең ниндәй йүнәлештә эшләүен төбөнә төшөп аңлап та етмәйбеҙ, заман һөнәрҙәрен белеү өсөн айырым мәғлүмәткә эйә булырға кәрәк.**




# ДИПЛОМ БАР - ЭШ ЮҠ,

## эш бар - күңелгә ятмай...

Элегерәк урта белемең, эшкә һәләтең булһа, бар ерҙә лә ҡуш ҡуллап ҡаршы алалар һәм бер урында ғына күпме теләйһең, шунса эшләү мөмкинлеге бар ине. Бөгөн иһә замана башҡасараҡ. Ҡайһалыр эшләүеңде эш биреүсендән кем булыуынан, ниндәй шарттарҙа нисә һумға тир түгеүеңдән сығып хәл итәһең. Кеҫәндә мотлаҡ юғары белемең булыуын раҫлаған диплом булыуы ла мөһим. Тик шуныһы, бөгөн ошо ҡатырға хужалары ла һөнәре буйынса эшләп, уның мәнфәғәтен күрә алмай. Быны сәбәптәрен төрлөсә аңлаталар. Тәү сиратта, йәш белгестең эшкә маһирлығы юҡ, һөнәрҙе ниндәйҙер юғары белем кәрәк булғанға ғына алған. Икенсенән, хеҙмәт баҙары нәҡ һин һайлаған һөнәр эйәләре менән тулған, өсөнсөнән, күп осраҡта эш биреүсе дипломыңа өстәп, 3 йыл хеҙмәт стажы талап итә. Бынан тыш, ғүмер буйы бер ерҙә эшләп, урынында ныҡлы тамыр йәйгән, әллә күпме тәжрибә туплаған бер хеҙмәткәр ҙә үҙ урынын "мә" тип тотороп ҡуймай. Шулай ҙа, ниндәй генә юғары белемең булмаһын, тауар, хеҙмәт сифатын эшсе ҡулдарһыҙ күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Эйе, бер генә ата-әсә лә балаһын ябай эшсе булһын тип үҫтермәй. Бар таптан-таянғанын тотоноп, уны уҡытырға, юғары белем бирергә тырыша, сөнки донъя көтөү өсөн, тәү сиратта, ниндәйҙер һөнәргә эйә булыуың мотлаҡ. Тик шуныһы, арабыҙҙа юғары белем алырға мөмкинлеге йә иһә һәләте булмағандар ҙа бар бит әле. Мәктәпте бөткәс, улар ҡайҙа барырға, нимә эшләргә тейеш? Шуға күрә, нимә генә тимәһендәр, тегенсе, ашнаҡсы, электрик, балта оҫтаһы, тракторсы, бульдозерсы кеүек һәр саҡта ла кәрәкле эшселәр әҙерләгән уҡыу йорттарының да баһаһын төшөрөргә ярамайҙыр. Нәҡ улар вуз белеменә эйә була алмаған йәштәрҙе оло тормош юлына әҙерләп сығара ла инде. Бөгөн илебеҙҙә эшсе ҡулдар етешмәй тип саң ҡаҡҡанда, биндай уҡыу йорттарының статусын үҫтереү бер ҙә артыҡ булмаҫ ине. Әммә бөгөн, һин дә мулла, мин дә мулла атҡа бесән кем һала, тигән мәҡәл актуалгә әйләнеп бара. Киләсәктә кем икмәк үҫтерер ҙә, кем картуф сәсеп, халыҡты ит-һөт менән туйындырыр һуң?

Ҡыҙыҡмы, әллә инде ҡыҙғаныслылыр, бөгөн исем, һүҙ өсөн генә юғары белем алыусылар ҙа күбәйҙе. Ундайҙар ҡулына диплом алғас, үҙ йүнәлеше буйынса бер көн дә эшләп ҡарамай, уларға ниндәй булһа ла берәй юғары уҡыу йортон тамамлау тураһында һүҙ мөһимерәк. Эшләмәүенең сәбәбен һөнәрен оҡшатмауы, эш хаҡының әҙ булыуы менән аңлатырға тырыша улар. Әммә күптәр был турала һөнәр алырҙан алда уҡ уйланырға кәрәклеген башына ла индермәй. Шул сәбәпле, дипломлы, әммә файҙаһыҙ, эшһеҙ белгестәр күбәйә лә инде. Бер көн дә эшләмәйенсә, кеҫәлә бушҡа ятҡан диплом менән генә эре сирттереп хәбәр һөйләп булмай шул. Күберәк аҡса алып, икенсе көнгә ышанып йәшәү өсөн диплом менән бергә ҡалын елкә лә талап ителә. Тик бөгөнгә йәштәрҙең күбеһенең сыҙамлығы ла самалы ғына. Уларға тиҙ һәм күп булһын. Шул арҡала элек-электән иң абруйлы һаналған һөнәрҙәрҙең бәҫе лә төшөп китә. Мәҫәлән, Бөтә Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәгенең социологтары әйтеүенсә, Рәсәй халҡының 40 проценттан күберәге, уҡытыусы булып етерлек аҡса эшләп булмай, был һөнәрҙең абруйы ла юҡ, тигән фекерҙә...

Республикала йыл башынан рәсми теркәлгән 18 мең эшһеҙҙе иҫәпкә алғанда, ҡайһы берәүҙәр һөнәр һайлағанда ҡайһы ере менән уйлай икән тип тә ғәжәп итәһең. Алған белемең файҙа килтермәгәс, уның өсөн әллә нисәмә йыл сабата туҙҙырыуҙың кәрәге бармы икән һуң? Тик, үкенескә күрә, бөгөн күптәр ата-әсәһенең үҙен уҡытыуға түккән сығымдарын да ҡаплай алмай. Кеҫәләге әленгә ҡатырға арҡаһында күптәр ябай эшсе булып эшләргә лә тартына. Шул арҡала юғары белемле белгес булып, өйҙә ятыусылар күбәйә. Юғары иҡтисад мәктәбе эксперттары бушта бушҡа ауҙарыусы йәштәр һанын иҫәпләгән. Бөгөн Рәсәйҙә 15 йәштән 24 йәшкәсә егет һәм ҡыҙҙарҙың 15 проценты бер ҡайҙа ла уҡымай ҙа, эшләмәй ҙә икән. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, был 2 миллиондан ашыу кеше тигән һүҙ. Дипломлы белгестәр менән донъя тулған, ә эшһеҙҙәр һаны кәмемәй, киреһенсә, арта ғына бара. Бөгөн республикала рәсми эшһеҙҙәр һаны 18 мең булһа, буш эш урындары 46 300-гә еткән. Был иһә, эшсе ҡулдарҙың һәр саҡта ла кәрәк һәм уларға ихтыяж ҙур булыуын аңларға теләмәйенсә, булдыра алмағанға үрелеүҙе, йәғни һауалағы торнаға алданып, ҡулдағы турғайҙы ысҡындырыуға бәрәбәр.

Һәр кем үҙ урынын белеп, мөмкинлегенән сығып күңеленә ятҡан һөнәр һайлаһа, илебеҙ иҡтисады ла, үҙебеҙ ҙә файҙа ғына күрер инек тә бит. Бәлки, был осраҡта оҙон аҡса эҙләп, ҡайҙалыр ситкә лә китергә кәрәкмәҫ ине. Ҡыҙыҡ өсөн Рәсәйҙә иң аҡсалы эшсе һөнәрҙәр исемлегенә күҙ һалайыҡ. Мәҫәлән, Мәскәүҙә автослесарға 120 мең һум тәҡдим итһәләр, тәҙәлөш инженеры һәм прорабҡа, шулай уҡ буяусы-штукатурға 100 мең һум вәғәҙәләйҙәр. Сантехник, балта оҫтаһына иһә 80-90 мең һум түләргә ризалар. Ошо урында илдәге иң аҡсалы төбәктәр исемлегенә лә күҙ төшөрәйек. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, иң юғары айлыҡ килем Ямал-Ненец автономиялы округында иҫәпләнә. Ундағы килем уртаса 100 мең һумға барып баҫа. Унан һуң Чукотка һәм Мәскәү ҡалаһы килә. Иң аҙ аҡсаны, айына 24 402 һумды, Алтай крайында түләйҙәр. Башҡортостан исемлектең урта өлөшөнә тура килә. Үҙебеҙҙекеләр ситкә китеп эшләргә тырышһа ла, ситтән беҙгә килеп эшләгәндәр ҙә бихисап. Юғары белемле яҡташтарыбыҙҙың ситкә китеп тормошон йәйләргә тырышыуы ситтән белемһеҙ гастарбайтерҙарҙың беҙгә килеп тамыр нығытыуына ла юл аса. Мәҫәлән, ете ай эсендә республикаға - 80 308 кеше килгән, 84 035 кеше ситкә киткән һәм шул арҡала халыҡ һаны 3 727 кешегә кәмегән. Белорет, Әбйәлил, Бөрйән райондарын сағыштырып ҡарайыҡ. Ошо райондар араһында Белоретта сәнәғәт етештереүе нығыраҡ үҫешкән, эш урындары ла күберәк кеүек, әммә статистика кире динамика күрһәтә. Йыл башынан Белорет районы һәм ҡалаһына 1 540 кеше килһә, 1 756 кеше ситкә сығып киткән, халыҡ һаны 216-ға кәмегән. Әбйәлил районына 1 321 кеше килгән, 976-һы ситкә киткән, район халҡы 345 кешегә артҡан. Бөрйән районына иһә 344 кеше килгән, 213 киткән, халыҡ һаны 131-гә артҡан.

**Әйткәндәй, республикаға яңы етәксе килеү менән социаль селтәрҙәрҙә төрлө тәҡдимдәр, ялыуҙар, кәңәштәрҙе үҙ эсенә алған яҙыуҙар күбәйҙе. Улар араһында Себергә, башҡа өлкәләргә һәм ҡалаларға эш артынан киткән ир-егеттәрҙе ҡайтарыу, быныһ өсөн яңы эш урындары булдырыу кәрәклеген кәңәш иткән сығыштар айырыуса күп. Был шул тиклем өлгөрөп еткән аяныслы хәл: ир-егеттәрһеҙ ҡалған ауылдар, атайҙарһыҙ ҡалған ғаиләләр ишәйгәндән-ишәйә бара. Тик был эш нисек тормошҡа ашырылыр, быныһын инде ваҡыт күрһәтер.**

Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

1

# Туған телем!

27-2 октябрь - ноябрь
(ҡарасай - ҡырпағай)
2018 йыл
№43 (825)

УЙЛЫҒА - УЙ

# АРАЛАШЫУ САРАҺЫ ҒЫНАМЫ,

## әллә рухи байлыҡ сығанағымы?

**Бала шәхесе үҫеше өсөн туған телдә генә түгел, ә башҡа телдәрҙе өйрәнеүҙең ни тиклем мөһим икәнен иҫкә алырға теләүем төп һөнәрем буйынса балалар психологы булыуым менән бәйле. Был осраҡта, үҙемдең шәхси педагогик тәжрибәмдән (шул иҫәптән, дүрт бала атаһы булараҡ та) һәм күп һанлы махсус ғилми сығанаҡтарҙы өйрәнеүемдән генә сығып фекер йөрөтөү менән сикләнергә теләмәй, башҡалар тәжрибәһенә лә мөрәжәғәт итмәксемен.**



Мәҫәлән, уҙған быуаттың 30-сы йылдарында совет балалар психологияһы фәненә нигеҙ һалыусыларҙың береһе булараҡ донъя кимәлендә танылыу тапҡан Лев Семенович Выготскийҙың балалыҡ осоронда күп теллелектең шәхес үҫеше өсөн бик әһәмиәтле фактор булыуы хаҡында яҙып ҡалдырған фекерҙәре бөгөн өр-яңынан баһалауға лайыҡ. Рәсәйҙә милли аҙсылыҡты тәшкил иткән халыҡтар күптән инде ике теллелеккә эйә, һәм күп милләтле Рәсәйҙә күп теллелекте үҫтереү өсөн донъяның башҡа илдәрендә күҙ алдына ла килтерә алмаҫлыҡ ыңғай шарттар бар. Уларҙы ҡулланмау, хатта махсус ҡаршылыҡ күрһәтеү иң элек берҙән-бер рус теле менән генә хушһынған ҡәүемдәр өсөн уғата зыянлы. Ғөмүмән, рус халҡының бер телле генә булып ҡалыуы ошо оло һәм бөйөк ҡәүемдең илаһи-ижади потенциалының тулыраҡ һәм киңерәк асылыуына аяуһыҙ тотҡарлыҡ итә. Бөйөк рус ғалимдары, яҙыусылары, сәнғәт эшмәкәрҙәренең бер нисә донъя телдәрен бала саҡтан уҡ өйрәнеүен онотоп барабыҙ түгелме һуң? XIX быуатҡа ҡараған рус әҙәбиәте әҫәрҙәренән рус дворяндары ғаиләләрендә балаларға француз йәки немец телдәрен өйрәтеү өсөн махсус гувернерҙар тотолоуын, ә лицей һәм гимназияларҙың уҡыу пландарынан рус теленән башҡа, грек, латин, немец йәиһә француз телдәренең мотлаҡ уҡытыла торған предметтар булыуын беләбеҙ. Ҡасандыр күп теллелек өҫтөнлөк иткән гимназиялар классик рус мәғарифының нигеҙен тәшкил итһә, бөгөнгө Рәсәй мәғарифы йөҙөндә беҙ ошо тарихи традицияның бөтөнләйгә юҡҡа сығып барыуына шаһитбыҙ.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ телдәрҙе бары аралашыу сараһы ғына, тип ҡарай башланыҡ, ә һәр халыҡ теле төбөндә ятҡан бөтмәҫ-төкәнмәҫ рухи байлыҡтарҙы барлау хаҡында уйлап та бирмәйбеҙ. XIX быуатта йәшәгән һәм ижад иткән күренекле рус мәғрифәтсеһе, педагогик һәм психологик әҫәрҙәре менән бар донъяға билдәле булған К. Д. Ушинскийҙың ошо хаҡта әйткәне образлы ла, фәһемле лә: "Халыҡ теле - уның рухи тормошоноң иң гүзәл, бер ҡасан да шиңмәй торған, мәңге яңынан сәскә атыусы гөлө". Әлбиттә, баҡсаны төрлө матур гөлсәскәләр биҙәгән кеүек, Рәсәйҙең рухи донъяһын да йөҙәрләгән халыҡ телдәре байытып тора. Ошо телдәрҙе ҡоротоуға булышлыҡ итеү бер гүзәл гөлләмәләй донъябыҙҙы йәмләп торған халыҡтар гөлләмәһенең рухи тамырҙарын ҡоротоу түгелме ни?

Башҡорт теленең оппоненттары, рус, сыуаш, татар һәм башҡа милләт балаларына башҡорт телен өйрәнеүҙән бер фәтеүә лә юҡ, тип ҡырт киҫә. Ысынбарлыҡ улар фаразлағансамы һуң? Юҡ, әлбиттә. Психологтар билдәреүенсә, кеше мейеһенең мөмкинлектәре икһеҙ-сикһеҙ, әммә беҙ уның бик аҙ ғына өлөшөн файҙаланабыҙ. Беҙҙең тәбиғи ҡыҙыҡһыныуыбыҙҙан яҙыуыбыҙ, донъя серҙәренә битараф булыуыбыҙ, башлыса, ғүмеребеҙ буйына матди байлыҡ артынан ҡыуыбыуыҙ, башҡа халыҡтарға өҫтәнерәк ҡарауыбыҙ, бөгөн төрлө милләттәргә айырылышҡан булыуыбыҙ арҡаһында боронғо ҡан-ҡәрҙәшлегебеҙҙе танырға теләмәүебеҙ, һуңғы сиктә ялҡаулығыбыҙ рухи йәшәйештең яңынан-яңы асыш-ҡыуаныстарынан мәхрүм итә. Был асыштарға тиҙерәк юлығайым, тиһәң, телдәрҙе күберәк өйрәнеү һәм белеү фарыз. Ошо һүҙҙәремә дәлил рәүешендә төрлө замандарҙа йәшәгән бер нисә аҡыл эйәһенең фекерҙәрен килтереү урынлы булыр.

"Телде өйрәнеү өсөн ирекле ҡыҙыҡһыныу ҡурҡыныс зарурлыҡтан күпкә мөһимерәк", тип яҙа христиан философы Аврелий Августин (354-430 й.й.). XVIII быуатта үҙенең азат һәм ҡыйыу фекерләүе менән бар донъяға билдәле булған француз философ-мәғрифәтсеһе, яҙыусы һәм тарихсы Вольтер күп теллелекте донъяны танып белеү асҡысына тиңләй: "Күп телдәрҙе белеү - бер үк йоҙаҡ өсөн күп асҡыстарың булыу". 1813 йылда Германияла Наполеон ғәскәрҙәрен эҙәрлекләп барғандарында яугир башҡорттарҙы күреп һоҡланған бөйөк шағир Иоганн Вольфганг Гете ла башҡа телдәрҙе белеүҙе хуп күргән: "Кем сит телдәрҙе белмәй, шул кеше үҙ теле хаҡында ла бер ни ҙә белмәй".

Беҙҙең зыялыларыбыҙ әлегә тейешлесә баһалап еткермәгән румын яҙыусыһы, донъя диндәре тарихын өйрәнеүсе, мифология белгесе, Чикаго университеты профессоры Мирча Элиаде ла (1907-1986 й.й.) күп телдәрҙе белеүе арҡаһында ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән: "Яңы эш ҡоралына эйә булыр өсөн мин һәр саҡта ла яңы тел өйрәнергә башлай инем",- тип яҙа ул һуңынан. 30-ҙан ашыу ғилми, әҙәби һәм философик хеҙмәте 18 донъя телендә баҫылып сыҡҡан ошо зыялы зат үҙе 8 телде - румын, француз, немец, итальян, инглиз, иврит, фарсы һәм санскрит телдәрен бик яҡшы белгән.

Балаларҙы мәктәпкәсә йәштән шашка һәм шахмат уйнарға өйрәтһәң, уларҙың фекерләү ҡеүәһенең тиҙерәк үҫешеүе хаҡында белмәгән кеше юҡтыр. Был осраҡта бала мейеһендә ошо уйын логикаһы менән бәйле нейрон бәйләнештәр системаһы барлыҡҡа килә, уны өр-яңы код-символдар эшмәкәрлеге тәьмин итә. Һәр яңы телде өйрәнеү ғәмәлдә ошондай уҡ тел коды, тел символдары системаһын барлыҡҡа килтерә. Яңы телде аңлап һәм теләп өйрәнеүсе уҡыусының интеллектуаль кимәле лә бермә-бер юғарыраҡ буласаҡ. Кем ошо психологик хәҡиҡәтте аңларға теләмәй, шул кеше балаһының шәхес булараҡ үҫеш юлындағы яңы мөмкинлектән үҙ теләге менән ваз кисә, тигән һүҙ был.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ЙӘТИМЛӘНЕП ТҮГЕЛ...

## етемһерәп

**Һай, йырлайҙар. Көнө-төнө. Бер туҡтауһыҙ. Йырҙың йыртығы юҡ. Шулай ҙа... Туған телебеҙҙең бәҫен төш өргән күренештәр менән һис тә килешә алмайым. Телгә бәйле хилафлыҡтарҙы хәҙерге заман эстрада йырҙарының һәр береһендә тиерлек табып була. Йырҙарҙың тексын контролдә тотоусы булмағас, улар яңғырай тора һәм үҙенең емерткес эшен эшләй тора.**

Беҙ йырҙың шундай сифатын да беләбеҙ: ул кешенең рухын ҡаҡшатыуға, лөғәтен үҙгәртеүгә, милли булмышынан тайпылдырыуға, зауыҡһыҙлыҡ тәрбиәләүгә лә һәләтле. Хәйер, был турала күп яҙалар, тик аныҡ ғәмәлдәр башҡарыусы ғына юҡ. Әле яңғыраған йырҙарҙың һәр икенсеһендә "һөйәһе килә", "үләһе килә", "күрәһе килә" тигән һүҙҙәр яңғырай. Башҡортса "һөйгө килә", "үлге килә" "күрге килә" була бит. Быңдай хилафлыҡтар, асылда, татар шағирҙарының һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы башҡортса башҡарғанда ҡабатлана. Беҙҙең йәш йырсылар хәҙер башҡорт телендә татарса йырлай. Һүҙҙәре лә, башҡарыу манераһы ла... Киң таралған "Пар алма" йырындағы "йәтимләнеп ҡалды алмағас", тигән һүҙбәйләнеште ишеткәс, туған телендең иғтибарһыҙ етем ҡалыуын тойғандай булаһың. Иптәш йырсылар, "йәтимләнеп" тигәне башҡортса "етемһерәп" була. Бер ҙә татар йырсылары башҡорт шағирҙарының һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы татарса "әчәй", "ҡучтым" йә "агай" тип йырламай бит!

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ЗАУЫҠ

# АҪЫЛ ХАЛҠЫМ!

Ҡайҙа барһаң, ни ҡылһаң да - эҙең ҡала,
Һиңә ҡарап халҡың йөҙө баһалана.
Ҙур әҙәп тә, хур ғәҙәт тә, ай, тарала -
Ил-йортоңдо данлап йөрө һәр тарафта.

Кейәү күҙлә, кәләш эҙлә үҙ халҡыңдан,
Әсәң теле яңғырап торһон һәр балаңдан!
Матурҙарың, батырҙарың тыуа торһон,
Был донъяла аҫыл халыҡ арта торһон!

Яҡты йөҙлө, матур һүҙле беҙҙең халыҡ,
Абруй һаҡла! Һоҡланыптар, ай, ҡалырлыҡ.
Кемдең заты - шуның заты, тип белһендәр,
Затлы халыҡ тоҡомонан был тиһендәр!

Үҙ илеңдең, үҙ телеңдең солтаны бул,
Сит телдәрҙә һайрамай бит хатта былбыл.
Халҡы өсөн хаҡы артыҡ тыуған илдең,
Бала өсөн моңо танһыҡ туған телдең!

Кейәү күҙлә, кәләш эҙлә үҙ халҡыңдан,
Әсәң теле яңғырап торһон һәр балаңдан!
Матурҙарың, батырҙарың тыуа торһон,
Ер йөҙөндә аҫыл башҡорт арта торһон!

**Светлана СӨЛӘЙМӘНОВА.**

ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШ!

# СӘС КӘҮӘКЛӘНМӘЙ,

## сәс ҡауаҡлана...

**Һуңғы ваҡытта үҙ телебеҙҙәге ҡайһы бер һүҙҙәрҙең дөрөҫ ҡулланылмауы күҙәтелә. Был нимәнән килә? Туған телде белмәү-аңламауҙанмы, әллә иғтибарһыҙлыҡтанмы? Шундай хаталарҙы миҫалдарҙа ҡарап үтәйек әле. Был, бәлки, ҡуптәргә ярҙам да итер.**

**Матур - күркәм.** Иғтибар итегеҙ: яҙышҡан, сығыш яһаған һәр кемгә барыһы ла күркәм булып китте: тыуған көн дә, исем дә, байрам да, йорт та, ризыҡ та һәм башҡалар. Матур, һәйбәт һүҙе бөтөнләй онотолдомо ни? Миҫал: "Исемең күркәм, кемдәр ҡушҡан? Өфө ҡалаһында йәшәгән атай-әсәйемде күркәм байрамдары менән ҡотлайым. Әллә ни күркәм килеп сыҡмай инде былай, йә ярай, кем әйтмешләй, эстә күренмәй. Быйыл йәш ғаилә күркәм йорт һалып сыҡты". Тәүге өс һөйләмдә күркәм урынын - матур, дүртенсеһендә матур йә яңы һүҙе алһа, һөйләмдәр ысынлап та ҡолаҡҡа ятышлы булыр ине.

**Ҡауаҡланыу - кәүәкләнеү.** Белмәйенсә, телһә ниндәй дарыуҙы ашарға ярамаған кеүек, һүҙҙәрҙең мәғәнәһен төшөнөп етмәгән көйө яҙмаҫҡа кәрәклеген дә аңлаһын ине ҡайһы бер ҡәләм оҫтаһы. Мәҫәлән, "Витамин етешмәгәндә, тире ҡорой, сәс ҡойола, кәүәкләнә". Билдәле булыуынса, бесән генә кәүәкләнә, ә сәс - ҡауаҡлана.

**Ҡараңғы - ҡара.** Миҫал: "Һутты ҡараңғы төҫтәге тимер шешәгә ҡойоғоҙ". Ҡараңғы төн, ҡараңғы бүлмә булыуы мөмкин, тик шешә түгел. Урыҫсанан темный тигән һүҙҙе тәржемә итеп маташыуҙыр инде был.

**Йоҡа - нәҙек.** Был һүҙҙәрҙең араһында мәғәнә үҙенсәлеге бар. Нәҙек һүҙе диаметры, арҡырыһы бәләкәй булған оҙонса әйбергә ҡарата әйтелә: нәҙек еп, нәҙек ағас; киреһе - йыуан. Ошоно белеп еткермәгән тел, һүҙ оҫталары бар арабыҙҙа. Миҫал: "... ҡара сәсле, ҡуңыр күҙле, нәҙек иренле (дөрөҫө: йоҡа иренле). Ҡамырҙың өҫкө ҡатламын нәҙегерәк итергә була. Абрикосты нәҙек кенә итеп турарға". Бында ла, билдәләнгән һүҙҙәрҙе йоҡараҡ, йоҡа һүҙҙәре менән алмаштырғанда, һөйләм башҡортса булыр ине.

**Үле - йәнһеҙ.** Ҡотҡарыусылар биш кешенең йәнһеҙ кәүҙәһен таба. Башҡорт "йәнһеҙ кәүҙә" тимәй, "үле кәүҙә" ти.

**Булдыҡһыҙ, эшкинмәгән - уңышһыҙ.** Миҫал: "Мин - уңышһыҙ кеше". Үҙеңдең эшкинмәгән, булдыҡһыҙ икәнеңде йомшартып, уңышһыҙ тип йыуатыуҙан бер фәтүә лә юҡтыр ул. Башҡорт эшкинмәгән кешене булдыҡһыҙ ти ҙә ҡуя. Шуны аңлап, үҙеңә дөрөҫ баһа биреп, артабан тырышыу яғын ҡарарға кәрәктер.

**Яҡ - тараф.** Миҫал: "Хаттар бөтөн тарафтарҙан килә". Хаттар бөтөн яҡтан килә, тиһәк, дөрөҫ булыр, сөнки, беренсенән, башҡорт тараф тип бик һөйләп бармай, икенсенән, бөтә тигән алмаш күп мәғәнәһенән бирә, шуға күрә яҡ һүҙенә күплек ялғауын ҡушыуҙың кәрәге юҡ.

**Тормош - йәшәйеш.** Йәшәйеш һүҙе донъяны баҫып алды, тиһәк, дөрөҫ булыр. Бер генә һөйләм бирәм: "Ул сағында донъя, ил, республика яңылыҡтары, халыҡтың йәшәйеше, тарихы менән даими танышып бараҫаҡһығыҙ, үҙегеҙҙе борсоған мәсьәләләргә яуап ала алаҫаҡһығыҙ". Башҡортса һөйләм түбәндәгесә булыр: "Ул сағында донъя, ил, республика яңылыҡтары, халыҡтың тормошо, тарихы менән даими танышып бара алырһығыҙ, үҙегеҙҙе борсоған һорауҙарға яуап алырһығыҙ". Әйткәндәй, йәшәйеш ҡағиҙәһе тигәнде тормош ҡағиҙәһе йә иһә йәшәү ҡағиҙәһе тип атағанда, ҡолаҡҡа ятышлы, әйтеүе еңел булыр ине.

**Ниңә көн буйы түгел, ә көн дауамында?** Ошо рәүешле яҙыу, һөйләү аптыраште ҡалдыра. Бер башҡорт та "Көн дауамында машина көттөм", тип һөйләмәй, "Көн дауамында ҡайҙа йөрөнөң?" тип һорамай. Ә уныһы: "Әсәһе, эш күп, көн дауамында эштә булдым", - тип яуапламай.

Башҡорт телендә ваҡытты белдергән һүҙҙәрҙең - минут, сәғәт, көн, төн, аҙна, ай, йыл, быуаттың - буйы, эсе була. Шуға ла башҡорт сәғәт буйы, көн буйы, аҙна буйы йәиһә ике секунд эсендә, бер аҙна эсендә, ике йыл буйы, йә ике йыл эсендә тип һөйләй, яраткан кешеһен "Һине көн буйы һағынып көттөм", тип ҡаршы ала. Миҫалдар килтерәйек: "Быйыл һигеҙенсе тапҡыр ун көн дауамында Яңы йылды кинәнеп байрам иттек. Һәр һөнәри байрамда тармаҡтың йыл дауамында башҡарған эшенә йомғаҡ яһала. Аҙаҡтан һөҙөп, көн дауамында эсергә. Башта мейескә яғып, өс тәүлек дауамында ҡазанды ҡыҙҙыралар. Хаҡлы ялға китер алдынан ун йыл дауамында ... баш табип урынбаҫары вазифаһында эшләй". Был һөйләмдәр башҡорт һөйләгәнсә булһын өсөн дауамында урынына буйы һүҙен яҙыу етә.

Һүҙ юҡ, журналист эше еңел түгел. Әммә һөнәреңдең оҫтаһы булыу өсөн талант, үткерлек, теләнде һәйбәт белеү һәм иң мөһиме - һөнәреңде яратыу кәрәк. Ә телде үҙ белдеге менән боҙорға бер кемдең дә хоҡуғы юҡ.

**Миңһылыу УСМАНОВА,**
**филология фәндәре докторы.**

ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!



# ХӘЛӘЛ ЕФЕТЕҢӘ...

## "әсәһе", "атаһы" тип өндәш, әйҙә

**Гәзитебеҙ биттәрендә баҫылған туған телебеҙгә ҡағылышлы мәҡәләләрҙе уҡырға яратам. Бигерәк тә "Әсәйем лөғәте" рубрикаһын диҡҡәт менән уҡып, телебеҙҙәге һуңғы быуат эсендә онотола барған ҡайһы бер һүҙҙәре менән тәүгә танышып, йә иһә ҡасандыр оло кешеләрҙән ишеткеләгән, әммә хәтерҙән юйылып киткәндәренең байтаҡ ҡыналарын ҡабаттан иҫләй йөрөйөм. Үкенескә, көндәлек һөйләшеүебеҙҙә файҙаланмау арҡаһында, күп кенә һүҙҙәребеҙ әкренләп кенә ҡулланыуҙан төшөп ҡалып бара. Иң яҡшы осраҡта ла, һүҙлектәрҙән генә таба алабыҙ уларҙы. Баҫмабыҙҙа туған телебеҙгә ҡағылышлы рубрикалар булыуы гәзит уҡыусыларыбыҙға артабан да телебеҙҙе байытыу мөмкинлеге биреүе шикһеҙ.**

### Төрлө-төрлө диалекттар...

Быйылғы һандарҙың береһендәге "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар" тип аталған мәҡәләмдә республикабыҙ райондарындағы һәр төрлө һөйләшеү диалекттары хаҡында бер килке яҙып сығарғайным. Милләттәштәребеҙҙең төрлөсәрәк итеп һөйләшеүе башҡорт телен боҙоу түгел, ә, киреһенсә, уның ни тиклем бай икәнен күрһәтеү һәм ана шул диалекттарҙы өйрәнеү зарурлығы хаҡында фекеремде әйтеп үткәйнем. Сығышы Стәрлебаш районынан булған танышым менән ҡасандыр булған бер әңгәмәләшеүем әлеге диалекттар хаҡында тағы бер аҙ һөйләшеп алыуға һәм бына ошо мәҡәләмде яҙырға тотоноуыма сәбәп булды. Бер улы Хәйбулла районы ҡыҙы менән танышып алғас, ана шул яҡтарҙағы һөйләшеү алымдарына иғтибар иткән икән танышым.

- Хәйбуллалар башҡортса дөрөҫ һөйләшмәйҙәр икән дә баһа, - тине ул миңә бер мәл.

- Нимәһен дөрөҫ әйтмәй улар?

- Мәҫәлән, "Хәйбулла ҡыҙы" тип әйтәһе урынға улар "Хәйбулла ғыҙы" тиҙәр. "Ғыҙ" тигән һүҙ башҡортта юҡ табаһа.

- Беҙ, баймаҡтар ҙа, тап ана шулай һөйләшәбеҙ ул. Баймаҡ ҡыҙы, Стәрлебаш ҡыҙы, тип тә әйтәбеҙ, әммә Хәйбулла ғыҙы, Йылайыр ғыҙы, Әбйәлил ғыҙы ла тибеҙ. "Ҡыҙы" һүҙенән алдағы торған һүҙҙең ниндәй өн менән бөтөүенә ҡарап...

Ҡырмыҫҡалы районынан булған бер хеҙмәттәшемдем "бартым", "килтем", "һалтым" тип һөйләшкәненә бер мәл иғтибар иткәйнем, әммә уға "башҡортса таҙа һөйләшмәйһең", тигән иҫкәртеү яһамаһым, тик "бына шундай һөйләшеүҙәр ҙә бар икән", тип, уны хәтерләп кенә ҡалырға тырыштым.

Әрмеләә саҡта Ҡурған өлкәһенән булған бер башҡорт һалдатының ҡаҙ, баҙ, тоҙ һымағыраҡ һүҙҙәрҙе "каһ", "баһ", "тоһ" тип һөйләшкәнен иҫләп ҡалдым. Ул ғына ла түгел, хатта беҙҙең Баймаҡ яғында ла "баһам", "аһам", "ҡыһам" тигән һөйләшеүҙәрҙе йыш ҡулланалар. "Ҡыҫҡа"ны "ҡыһҡа", хатта "ҡыһҡаҡ" тип тә әйткеләйҙәр, ә ҡайһы берәүҙәр ҡыҫаланы "ҡыһала" тиҙәр. Әҙәби тип аталған телебеҙҙән бер аҙ башҡараҡ булған "һаһыҡ", "ҡыһтырғыс" һымағыраҡ һүҙҙәр бихисап.

ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР

*Фекерләү өсөн сит тел - яһалма тын алдырыу аппараты ул. Ватандаштарының туған телен тыйып, сәйәси көс эйәләре һаҡһыҙлыҡтан, уйлап еткермәүҙән йәки еңәйәти холоҡһоҙлоҡтарынан кешеләрҙең яҙмыштарын боҙа, уларға үсергә бирмәй, тимәк, нисек кенә илде һөйөүҙәре хаҡында лаф ормаһындар, шул уҡ ваҡытта уны емереүсе лә улар. Ысын илһөйәрҙәр ватандаштарының теленә ҡаршы көрәш алып бармай; аҡылһыҙлыҡ һәм хаинлыҡтың илһөйәрлек менән уртаҡлығы юҡ.*

✓ ***Бәҡыйлыҡҡа күскән кешеләр теге донъяла ла туҡ һәм ҡәнәғәт булһындар, тип, әхирәткә оҙатҡанда уларҙың баш осона һинд-арийҙар бал һәм май тултырылған көршәктәр ҡуйыр булған.***



Әсәйем мәрхүмә һәм унан башҡа оло быуын кешеләре "ҙур" тигән һүҙҙе "һур" тип һөйләшә торғайны. "Хәҙер һурайҙың бит инде..." тигәндәрен хәтерләйем. Мәктәптә ундай диалекттарҙы өйрәнмәгәнгә күрә, миңә боронғо кешеләр дөрөҫ һөйләшмәгән һымаҡ тойола ине.

"Төштән һуң" тигән һүҙбәйләнеште Баймаҡ яҡтарында "төштән кире" тип тә әйтәләр. Бындай һөйләшеүҙе Ғалимов Сәләм дә ҡулланғандыр, тип уйлайым, сөнки уның "Крәҫтиән субы" тип аталған бер шаян шиғырында "...Ну, гражданин, этот суп - ваших суптан чем кире?.." тигән юлдар бар.

Йылайыр районы Ишҡужа ауылында тыуып үҫкән атайымдың "ҡабаланма" тиеү урынға "әптәләнмә" тигәнен ишетеп үҫтем. Шул район вәкилдәре был һүҙҙе йыш ҡына ҡуллана икән.

Ауылда элегерәк шулай уҡ "көлле" һүҙен йыш ҡуллана торғайнылар. Мәҫәлән, берәү икенсеһен ҡунаҡҡа саҡырып, "Көллегеҙ ҙә килегеҙ" (бөтәгеҙ ҙә килегеҙ), тип өндәшә. Башҡа бихисап һүҙҙәр кеүек, ул ғәрәп теленән ингән, урыҫ теленә всё, всякий, каждый, тип тәржемәләнә. Берәү ҡыҙын ситкә кейәүгә бирһә, "Ниндәй йынс кешеһенә сыҡты ҡыҙығыҙ?" тип һорағандарын да ишеткәнем бар. Әсәйем дә йыш ҡына: "Кәләште үҙ йынсығыҙҙан алығыҙ", - ти торғайны, йәнәһе, үҙ милләтеңдән. Ә әҙәби телебеҙҙә "йынс" һүҙе "енес" булып ҡына һаҡланып ҡалған. Был һүҙҙең ғәрәпсәнән урыҫ теленә тәржемәһе - принадлежность к чему-либо (половая, национальная и.т.д.). Икенсе төрлө итеп әйткәндә, боронғо ата-бабаларыбыҙ ошо һүҙҙе тулыһынса, киңерәк мәғәнәлә ҡулланған икән.

"Үҙ иркенән тыш", йәғни, мәжбүри рәүештә, тигән һүҙбәйләнеште беҙҙең яҡта, шулай уҡ, "иркенән ғәйри", тип тә әйтә торғайнылар. "Ғәйри" һүҙе ғәрәпсәнән русаға "кроме" тип тәржемәләнә. Ошо һүҙҙе лә һуңғы йылдарҙа әллә ни ишеткәнем юҡ. Онотолоп бара, ахырыһы.

"Әсәйем лөғәте" рубрикаһындағы "лөғәт" тә ғәрәпсәнән "тел" тип тәржемәләнеүен башҡорт филологияһын өйрәнмәгән күпселектең белмәүендә шигем юҡ.

## Хәләл ефет - иптәшме?

Республикабыҙ райондарындағы һәр төрлө диалекттарға иғтибар итеп, үҙебеҙҙең яҡ кешеләренең һөйләше менән сағыштырыуҙарым үҙемдең телемде байытыуға ла ярҙам итәлер, тип уйлайым. Ҡайһы саҡ, шулай ҙа, телебеҙгә бер аҙ ятыраҡ һүҙҙәр ҙә килеп ингеләгән һымаҡ. Бер ағайҙың икенсе бер таныш ҡатын менән һөйләшеүенә иғтибар иттем. Ҡатын үҙенең хәләл ефетен "иптәшем", тип атағас, был ағай: "Ул һиңә нишләп иптәш булһын, "ирем", тип әйтһәң ни була?" - тигән иҫкәрмә яһаны. Ағайҙың уйынлы-ысынлы әйткәненән мәҙәк табып, көлөп кенә, оноторға ла булыр ине, тик бына ошо һүҙҙәрҙә туған телебеҙгә ҡағылышлы мөһим генә бер мәғәнә ятҡан һымаҡ тойолдо. Никахта торған парҙарҙың береһе икенсеһен "иптәш" тип атауын электән күп мәртәбәләр ишетеп йөрөгән булһам да, быға саса әллә ни иғтибар итмәгәнмен икән. Ысынлап та, был һүҙ "товарищ", тигәнде аңлата түгелме?..

Сирек быуат хеҙмәт иткән дәүерҙә үҙем ул һүҙҙе әллә күпме меңәрләгән тапҡыр ҡулланғанмындыр. "Иптәш полковник", "иптәш капитан", "иптәш сержант"... тип көнөнә генә әллә нисә тапҡырҙар мөрәжәғәт итергә тура килә ине. Элеккерәкке бер фильмда берәүҙең үҙенең ҡатынына "товарищ Надя" тип өндәшкәнен ишеткәс, ирмәк кенә тойолғайны. Күрәһең, ул ваҡытта был һүҙ модала булғандыр һәм беҙҙең телебеҙгә лә шул мәлдәрәк килеп ингәндер. Башҡортса-русса һүҙлектә был һүҙ мәғәнәләренең береһе "супруг, супруга", тип тәржемә ителә. Берәүҙең ҡатыны йәиһә ире хаҡында һөйләгәндә "уның тормош иптәше", тигән һүҙбәйләнеште йыш ҡулланабыҙ шул. Коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексында "Кеше - кешегә дуҫ, иптәш һәм туған", тип яҙылғанын хәтерләйем. Фекерҙе шундайыраҡ йүнәлештә тағатып алып, уйлай башлаһаң, ысынлап та, кеше үҙенең хәләл ефете менән дуҫтарса, иптәштәрсә, йәиһә туғандарса, ғөмүмән, татыу мөнәсәбәттә генә лә булырға тейеш. Тик, шуға ла ҡарамаҫтан, башта әйткәндәй, ҡатыныңды "иптәш" тип атау барыбер килешеп етмәгән һымаҡ.

Үҙеңдең хәләл ефетең хаҡында һүҙ барғанда, башҡорт телендә унан башҡа ла атамалар күп, әлхәмдүлиллаһ. Мәҫәлән, күп кенә кешеләр берберенеһен Әлмира, Гөлмира, Фәүзиә, Таһир, Йосоп, тип исеме менән атай. Ә кемдер үҙенең ҡатынын хатта ҡартайып киткәндән һуң да "минең кәләш" тип кенә алып йөрөй. Үҙенә генә өндәшкән саҡта (кәйефкә ҡарап) "һөйөклөм", "бәғрем", "йөрәгем", "алтыным", тип әйтеү ҙә насар түгелдер.

Элегерәк яҙылған китаптарҙағы хикәйәләргә иғтибар итһәң, унда ирҙәр үҙҙәренең һөйөклөһөнә "бисәкәй" тип тә мөрәжәғәт итә. Тик нишләптер, хәҙерге бәғзе ҡатындар былай өндәшеүҙе әллә ни өнәп етмәй. Минең хәләл ефетем дә йәш саҡта ана шулай тип өндәшһәң, "Был һүҙ мәҙәни булмаған һымағыраҡ яңғырай бит. "Бисә", тигәс тә, илле-алтмыш йәштәр самаһындағы, "мөлкөп" йөрөгән йыуантағыраҡ ҡатынды күҙ алдына килтерәм", тигәйне. Йәнәһе лә, был мөрәжәғәт йәш ҡатындарға килешеп етмәй. Бындай фекер, әлбиттә, дөрөҫлөккә тап килмәй. Беҙҙең тирәлә (Баймаҡ районында) был һүҙҙе, "фәлән кешенең бисәһе", тип, башлыса, икенсе бер сит ҡатын хаҡында һөйләшкәндә ҡулланыуҙары сәбәпле, шулай тойолғандыр уға. Күп кенә башҡа райондарҙа ошо термин ир кешенең үҙенең хәләл ефетенә ғәҙәттәге мөрәжәғәт итеү һүҙе булып тора бит. Ә оло йәштәгеләрҙең (айырыуса, Баймаҡ, Бөрйән, Әбйәлил, Хәйбулла тирәләрендә) хәләл ефетен "әбейем", тип атағанын беләм.

Элегерәк беҙ бала саҡта ауылыбыҙҙа йәшәгән ҡарт ҡына бер инәй үҙен "әбей", тип әйткәндере менән килешмәй, кешеләрҙе: "Нишләп мин әбей булайым, бисә, тип атағыҙ", - тип төҙәткән. Бәғзе бер райондарҙа "әбей" атамаһы менән өләсәләренә, ә кемдәрҙер ҡәйнәләренә өндәшә. Мәҫәлән, ҡайны-ҡәйнәләре Стәрлетамаҡ яғынан булған ҡустым хәләл ефетенең ата-әсәһен "бабай", "әбей" тип атай. Баштан уҡ уға шулай тип өндәшергә ҡушҡандар икән. Ә киленебеҙ беҙҙең атай-әсәйебеҙгә "ҡайным" һәм "ҡәйнәм" ти торғайны.

Минең атайым һәм әсәйемә килгәндә инде, ул мәрхүмдәрҙең бер-береһенә исеме менән өндәшкәнен бер ваҡытта ла ишеткәнем булманы. Исемләп тә, башҡа берәй төрлө атама менән дә түгел, береһе икенсеһенә әйтер һүҙҙәрен шул көйөнсә генә нисектер әйтә ине. Әйтелгән һүҙҙәрҙең фәҡәт үҙенә генә йүнәлтелгәнен икенсеһе шунда уҡ аңлай. Күп кеше араһында булһалар ҙа, "һин кемгә әйтәһең ул", тип һорашмай торғайнылар. Ә инде береһе хаҡында башҡаларға ниҙер һөйләгәндә "балаларҙың атаһы, әсәһе", тип әйтерҙәр ине. Ейәнсура районында йәшәгән беҙҙең ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар бер-береһенә "атаһы", "әсәһе", тип өндәшә торғайны.

Хәләл ефетеңә ҡарата бына ошо рәүештәге мөрәжәғәт шәриғәт ҡанундарына ла тап килә. Ислам динендә булған боронғо ата-бабаларыбыҙ һәр тарафтан шәриғәт буйынса йәшәргә тырышҡан. Тик һуңғы быуат дәүерендә генә телебеҙҙең күп кенә ҡиммәттәре үҙгәргеләп киткән. "Атаһы" йә "әсәһе" тип өндәшеүҙәр, минеңсә, балалар һәм башҡалар алдында берберендең абруйын күтәреүгә лә ниндәйҙер кимәлдә сәбәпсе, ярҙамсы булып торалыр. Бер-береңә хөрмәт йөҙө менән мөрәжәғәт иткән һымағыраҡ яңғырай бит был һүҙҙәр. Ана шул боронғо "атаһы", "әсәһе", тигән матур яңғырашлы, гүзәл һүҙҙәребеҙҙең милләттәштәребеҙ теленән төшөп ҡалыуын бер ҙә генә теләмәйем. Үҙемдән башларға уйланым. Ошо мәҡәләне яҙа башлаған мәлдән, "әсәһе", тип хәләл ефетемдең маҙаһына тейәм. Күңелгә ятып торған был һүҙҙе телемде артабан байытыуҙың бер бәләкәй генә өлөшө итеп тоям.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР

*Бер нисә көн буйы ашамаҫҡа ла, эсмәҫкә лә була, тик туған телһеҙ бер нисә сәғәт тә тороу мөмкин түгел, сөнки кеше уйламайынса тора алмай һәм ул туған телендә уйлай. Һулар өсөн һауа нисек кәрәк булһа, уйлар өсөн туған тел дә шулай кәрәк.*

*Туған тел - бөтөн бынан алдағы быуындар эштәренең тере йылъяҙмаһы ул. Уның арҡылы ғәйәт ҙур белем, рухи, фәнни һәм мәҙәни ҡиммәттәр тупланған. Ул ошо ҡиммәттәрҙе тыуҙырыусы, бар итеүсе, һаҡлаусы. Шуға күрә лә ул кешенең төп үҫеш ҡоралына әйләнә. Унан ҡолаҡ ҡағыу - һаҡлаусыһыҙ тороп ҡалған бер бахырға әйләнеү, тимәк.*

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР

*Өлгөрөп етеү йәшенә һәр бер кеше ни тиклемдер белем туплай, ҡараштары һәм принциптары нығына, донъяны танып-белеү һәм үҙлеген атҡарыу сараһы булараҡ, туған теленә камил эйә була.*

*Фекерләү туған тел категорияһы, төҙөлөшө һәм системаһына, уның һүҙлеге, грамматикаһына бәйле. Туған тел әйләнә-тирә донъяны сағылдырып, аңлатып ҡына ҡалмай, ә психологияны, белем һәм ҡиммәттәр системаһын, төшөнсәләр һәм күҙаллауҙарҙы ла барлыҡҡа килтерә.*

### ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

**Элегерәк беҙҙең халыҡта берәй кешенән яҡшы хәбәр ишеткәндә, хуплап, рәхмәт йөҙөнән яуап итеп, "Һай, ауыҙыңа - бал да май" тиерҙәр ине. Бындай ҡыуанысльі хуплау, рәхмәт һүҙен әле лә һирәкләп ишетергә тура килгеләй.**

# АУЫҘЫҢА БАЛ ДА МАЙ

Был "Ауыҙыңа - бал да май" тигәндең мәғәнәһе асыҡ, аңлауға ҡыйынлыҡ тыуҙырмай кеүек. Башҡорт халҡы Урал тауҙарында һәм уның тирә-йүнендәге ерҙәрҙә бик боронғо замандарҙа формалашып, ул ерҙәрҙән бер ҡайҙа ла китмәйенсә, шунда көн иткән. Малсылыҡ менән шөғөлләнгән боронғо төрки халыҡтар, шул иҫәптән башҡорттар буйынса ла оло белгес, совет, Рәсәй археологы С.А.Плетнева әле совет заманында уҡ ошоно раҫлап яҙа: "Башҡорттарҙың тотороҡло үрсеп, үҫешеп, тормошта тыуып торған төрлө тарихи катаклизмдарға бирешмәйенсә, һаҡланып ҡалыуын уларҙың Уралда бик боронғо дәүерҙәрҙә формалашып, аҙаҡ был ерҙәрҙән бер ҡайҙа китмәйенсә, шунда нығынып көн итеп, шундағы тәбиғәт шарттарына яраҡлашып хужалыҡ итеүҙәре менән генә аңлатырға булалыр", - тип яҙып сыҡҡайны уҙған быуаттың 80-се йылдарында.

Ысынлап та, башҡорт донъяһы Уралдың ҡырыҫ тәбиғәт шарттарына ныҡлап яраҡлашҡан комплекслы хужалыҡ булған. Төп йәшәү сығанағы малсылыҡ булһа ла, башҡорт шулай уҡ игенселек, балыҡсылыҡ, ҡортсолоҡ менән дә ныҡлап шөғөлләнгән. Ҡортсолоҡтоң иң боронғо ысулы булған солоҡсолоҡ кәсебенең тик башҡортта ғына һаҡланып ҡалыуы үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй. Башҡорт иленә килгән урыҫ һәм башҡа милләт кешеләре башҡорттоң көнитмешен ҡарап, уның тураһында "башҡорт иң төп ҡортсо", тип буштан ғына әйтмәгәндер.

Хужалыҡ итеү ысулдарын Уралдың ҡырыҫ тәбиғәт шарттарына яраҡлаштырып хужалыҡ алып барған башҡорт өсөн бал һәм май иң туҡлыҡлы һәм төп ризыҡтарҙан һаналған. Шуға күрә лә ул, яҡшы хәбәр килтергән кешенең үҙенә лә изгелек, донъяһының гел теүәл, ризығының һәр саҡ мул булыуын теләп, уға "Ауыҙыңа - бал да май" тип яуаплаған, күрәһең.

Был матур теләк бик тә оҙон ғүмерлелер. Ул башҡорттоң ата-бабаларының береһе һаналған боронғо һинд-арийҙар дәүерендә барлыҡҡа килгән, тиергә була. Бал һәм май тултырылған көршәктәр тураһында "Ригведа", "Атхарваведа" тигән боронғо әҫәрҙәрҙә телгә алына. Бәҡыйлыҡҡа күскән кешеләр теге донъяла ла туҡ һәм ҡәнәғәт булһындар, тип, әхирәткә оҙатҡанда уларҙың баш осона һинд-арийҙар бал һәм май тултырылған көршәктәр ҡуйыр булған. Боронғо ҡурғандарҙан табылған бындай көршәктәр ғалимдар тарафынан ярайһы уҡ ныҡлап тикшерелгән.

Шулай итеп, үҙебеҙҙең вайымһыҙлығыбыҙ, битарафлығыбыҙ арҡаһында хәҙер һирәк ҡулланылған, телебеҙҙән төшөп ҡалып барған һәм онотолоуға дусар ителгән "Ауыҙыңа - бал да май" тигән бик тә матур боронғо теләк-һүҙбәйләнештең бер нисә мең йыллыҡ тарихы бар икәнен күрәбеҙ. Ундай боронғолоҡ һәр халыҡҡа ла бирелмәгән, шулай булғас, уларҙы көндәлек тормошта ҡулланып, киләсәк быуынға тапшырып, артабан да йәшәтергә кәрәк. Киләсәк быуын ғалимдары ла халҡыбыҙҙың үткәндәрен тикшерер һәм әлеге боронғо һүҙҙәр уларҙың да ғилми тикшеренеүҙәрендә бик тә кәрәк буласаҡ, тип өмөтләнәйек.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

ТЕЛЕБЕҘ ЫНЙЫЛАРЫ

**Халҡыбыҙҙа шундай һутлы һәм тере ҡуҙҙай баҙырап тороусы, ынйы кеүек аҫыл һүҙҙәр күп. Улар төрлө һүҙлектәргә инеп, халҡыбыҙҙың алтын фондын тәшкил итә. Үкенескә күрә, һуңғы быуын яҙыусыларының әҫәрҙәренә лә ул һүҙҙәр һирәк инә, улар, асылда, төпкөл ауылдарыбыҙҙа йәшәүсе инәйҙәребеҙҙең, олатайҙарыбыҙҙың тел осонда тере көйө йәшәй. Ул ынйыларҙы беҙ гәзитебеҙҙә "Әсәйем лөғәте" рубрикаһында бирә барабыҙ, әлбиттә. Хәтергә төшөрөүҙе дауам итәйек.**

## АТА-БАБАҢ ҠАЛДЫРҒАН ҺҮҘ

**Абағай** - сос, теремек.
**Абата** - ығыш. Абатаһы әйләнеү - аҡрын ҡыланыу.
**Абдан** - бөтөнләй.
**Абышҡа** - ир; ир-атҡа кәмһетеп әйтеү һүҙе.
**Ағалаш** - бер туған ир балалар.
**Ағасат** - салпы (ҡарышҡаҡ) ат. Ағасатҡа менмә, сабыйға теймә, күккә сөймә (мәҡәл).
**Ағасауыҙ** - тәрбиәһеҙ, тупаҫ.
**Ағасигәү** - уҙһүҙле.
**Ағас тел** - тупаҫ телле.
**Ағрай** - аҡыш.
**Ағута** - түрә.
**Ағын-түген** - бөтмәҫ-төкәнмәҫ.
**Аҙар** - унҡайһыҙ, борсолоу. Баланың аҙары булһа ла, биҙәрҙе булмаһын.
**Аҙау I** - ҡаушау; арыу.
**Аҙау II** - уҫал; бик ҡарт.
**Аҙауандай** - әҙмәүерҙәй.
**Аҙман** - аҙып-туҙып йөрөүсе.
**Ажар** - илһам; күркәм.
**Ажыр-божор** - ҡытыршы.
**Азыған** - ялағай.
**Айғаҙау** - исәңгерәү.
**Айнаныу** - ҡаңғырып йөрөү.
**Айныу** - дүнеү; арыныу.
**Айһындыҡ** - мыҡты, ҙур; матур.
**Айылта** - асыҡ.
**Аҡайыу** - үрһәләнеү, ашҡыныу; бер күреүҙә ғашиҡ булыу.
**Аҡанай** - аҡ ҡына.
**Аҡбиҙәү** - бер генә бала табып туҡтаған ҡатын.
**Аҡбәйел** - хуш күңелле.
**Аҡйауын** - оҙаҡҡа һуҙылған ваҡ күҙле ямғыр.
**Аҡсоға** - арҡа мейеһе.
**Аҡтыҡ** - нимәнендер аҙағы, һуңы.
**Аҡшандау** - алан-йолан ҡараныу.
**Алабай** - эскерһеҙ, асыҡ; ҡыҙыу, яндырай; юха, йылмаяҡ.
**Айыр** - сата.
**Алағайымға** - алъюҫыҡҡа.
**Алаҡандаҡ** - тиктормаҫ, аҙғын.
**Аландау** - һиҫкәнеү.
**Алаптай** - үтә ҙур, килбәтһеҙ.
**Алаҫтау** - туҡмау.
**Алатыр** - лаҡылдаҡ, әрһеҙ.
**Албары** - башҡа ваҡытта.
**Албаҫты** - яман; ялбыр.
**Алғаҙау** - дәртләнеү, ярһыу.
**Алғазы** - бирән.
**Алғаш** - эйәр ҡашағаһы.
**Алйаҡ** - ҡаҙанлыҡ.
**Алйау** - һыҙланыу.
**Алйырыш** - яңылыш; еңел аҡыллы.
**Алйыныу** - арыу.
**Алымсаҡ** - йәштән йәрәшелгән ҡыҙ.
**Анһығыу** - сарсау; теләү, ашҡыныу.
**Аңғарыу** - аңлау; абайлау.
**Апара** - әсетке; бутама.
**Апаруҡ** - ярайһы, күп кенә.
**Арам** - яуыҙлыҡ.

(Дауамы бар).

ӘЙТӘГҮР!

# МИН БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМ!

**Ҡыуаныслы бер йола барлыҡҡа килде һуңғы йылдарҙа район ауылдарындағы мәктәптәрҙә. "Мин башҡортса һөйләшәм, ә һин?" тигән флешмобтар, акциялар әленән-әле үтеп тора уларҙа. Өлкәндәр бындай сараларҙың балалар күңелендә телһөйәрлек тойғолары тәрбиәләүе тураһында шатланып билдәләй. Шулайҙыр. Ошондай телһөйәр балалар ауылдарҙа ғына түгел, республикабыҙҙың баш ҡалаһында ла бихисап икәнен беләбеҙ. Тыңлайыҡ әле бер нисәһен:**



***Гөлназ Әхмәтйәнова, М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының 8 синыф уҡыусыһы:*** Өфөгә күсеп килгәс, мин башта ҡаланың 5-се лицейына уҡырға барҙым. Шунан әсәйем М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы тураһында белеп ҡалып, унда инеп ҡарап, белем усағының матурлығына, балаларҙың матур итеп башҡортса һөйләшеп йөрөүенә иҫе китеп, мине 5-се синыфҡа уҡырға ошонда бирҙе. Ғаиләлә тик башҡортса ғына һөйләшкәс, яңы белем усағы күңелемә ятты, урыҫ телен дә әкренләп өйрәнеп алдым. Хәҙер инде башҡорт теле буйынса йыл һайын район һәм ҡала кимәлендәге олимпиадаларҙа ҡатнашам, уҡыусылар араһында үткәрелгән ғилми конференцияларҙан да ситтә ҡалмайым, ижади эштәремдә лә конкурстарға ебәреп торам. Башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарырға яратам, үткән аҙнала ғына "Фольк-тайм" фольклор сәнғәте буйынса республика конкурсының һайлау турын үттем.

Туған телемде белеү халҡымдың мәҙәниәте, тарихы һәм бай әҙәби мираҫы менән танышыу мөмкинлеген бирә. Башҡорт халҡының тарихы тураһында китаптар уҡып башлаһаң, айырылып булмай, йөрәктә оло ғорурлыҡ уяна, баштар күтәрелеп, аң асылып китә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә лә уҡытыусыбыҙ Айгөл Игелекова беҙгә төрлө шәхестәр тураһында презентациялар ойоштора, документаль фильмдар ҡарайбыҙ, башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлайбыҙ. Бына шундай ҡыҙыҡлы дәрестәр үткәрә уҡытыусыбыҙ. Беҙҙең гимназияла башҡа милләт ҡыҙҙары-малайҙары ла белем ала, улар бында үҙ теләге башҡорт телен дә башланғыс синыфтан алып тырышып өйрәнә. Атай-әсәйҙәре уларҙы, моғайын, "Башҡортостанда йәшәгәс, республиканы тәҙәүсе төп халыҡтың телен белергә кәрәк", тип алып килгәндер был гимназияға. Башҡорт атай-әсәйҙәре лә үҙ балаларына "Туған телде белеү кәрәк!" тигәндә һеңдереп үҫтерһен ине.

***Баязит Кәримов, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының 5-се синыф уҡыусыһы:*** Беҙ ғаиләбеҙҙә тик башҡортса ғына һөйләшәбеҙ, шуға мин туған телемде һәйбәт беләм. Балалар баҡсаһында ла, әле мәктәптә лә башҡортса һөйләшкән уҡытыусылар, малай-ҡыҙҙар менән аралашам, башҡорса үткән сараларҙың уртаһында булырға ынтылам. Башҡорт теле дәрестәрендә диктант һәм инша яҙып, төрлө һорауҙарға яуап биреп, яҡшы билдәләр алам. Әлеге ваҡытта "Ҡушма һөйләм" тигән теманы үтәбеҙ, ҡағиҙәләрҙе өйрәнеүе ауыр түгел былай. Китапта бөтәһе лә матур итеп тасуирланған, һүрәттәре ҡыҙыҡлы. Башҡорт телен белгәс, мин башҡорт халҡының мәҙәниәтен, әҙәбиәтен яҡшы беләм һәм уны башҡаларға ла һөйләп ишеттерә алам. Туған телебеҙҙе белмәгән ҡайһы бер йәштәштәремде осратҡаным бар. Улар миңә йәл булып китә. Беҙ үҙ-ара башҡортса һөйләшә башлаһаҡ, ситтә генә етемһерәп баҫып торалар. Атай-әсәйҙәре өйрәтмәгәндер инде. Өйрәтмәгәс, ниңә балаларын башҡорт гимназияһына алып килделәр икән, тип тә аптырайым. Уҡытыусылар өйрәтһен, тиҙәрме икән? Иң тәүҙә ғаиләлә, атай-әсәйҙәр менән һөйләшеп өйрәнергә кәрәк инде ул туған телдә. Башҡортостанда йәшәгәс, башҡорт халҡының улы булғас, был телде мотлаҡ белергә тейешбеҙ бит...

***Алһыу Хәкимова, З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһының 11 синыф уҡыусыһы:*** Был гимназияла мин беренсе синыфтан белем алам. Сөнки атай-әсәйем миңә туған телемде өйрәтеп үҫтергән һәм уҡырға биргәндә лә быны иҫәпкә алған. Хәҙер сығарылыш уҡыусыһы булараҡ, ышаныс менән әйтә алам: был гимназияла башҡорт теленән дә, башҡа фәндәрҙән дә яҡшы белем бирҙеләр. Мин төрлө конкурстарҙа, олимпиадаларҙа, ижади һәм ғилми эштәр конкурстарында әүҙем ҡатнашып, үҙемә кәрәкле портфолио тупланым, унда башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә бәйле грамоталар, дипломдар ҙа бар. Туғыҙынсы синыфтан һуң башҡорт теле буйынса имтихан тапшырҙым. Әлбиттә, киләсәктә техник йүнәлештәге һөнәр үҙләштерәсәкмен. Шулай ҙа туған телемде белеү үҙем өсөн кәрәк икәнен яҡшы аңлайым. Гимназияға бер ваҡыт М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның ҡаҙаҡ студенттары осрашыуға килгәйне, улар үҙ телендә һөйләне, йырланы - барыһын да тиерлек аңлап ултырҙым. Ҡырғыҙ, үзбәк кеүек башҡа төрки халыҡтарҙың телдәрен дә аңларға була. Шулай булғас, башҡорт теленең файҙаһы тураһында әйтеп торорға ла түгел. Тиҫтерҙәремә теләктәргә килгәндә, кеше нисек йәшәргә, ниндәй тел белергә, ниндәй шөғөл һайларға икәнде үҙе хәл итә. Тик шуны онотмайыҡ: туған телен белмәгән кеше үҙенең кем икәнен, тамырҙарын да белмәй. Йәмғиәттә үҙ урынын табам тигән кеше быны яҡшы аңлайҙыр, тип иҫәпләйем. Мин атай-әсәйемә шундай мөмкинлек биргәндәре өсөн рәхмәтлемен.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



***Динар Шаһиев, эшҡыуар:*** Мин Башҡортостанда тыуғанмын. Атай-әсәйем - башҡорт. Мин башҡорт. Мин дә башҡортса һөйләшәм! Ғөмүмән, өйҙә беҙ тик башҡортса һөйләшәбеҙ. Мине башҡортса тәрбиәләнеләр.

Бөгөн әленән-әле, "Башҡортостанда башҡорт телен уҡырға кәрәкмә?" тигән һорау күтәреп, ығы-зығыланып алалар. Бындай бәхәс бөтөнләй урынһыҙ. Башҡортостан Конституцияһын асып ҡарайыҡ. Уның 1-се статьяһында: "Башҡортостан Республикаһында рус һәм башҡорт телдәре дәүләт теле", - тип яҙылған. Конституцияның 54-се статьяһында: "Башҡортостан Республикаһы уның территорияһында йәшәгән халыҡтарҙың туған телдәрен һаҡлау буйынса тигеҙ хоҡуҡтарын һәм туған телдәрҙе өйрәнеү һәм үҫтереү мөмкинлектәрен гарантиялай. Башҡортостан Республикаһында Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен өйрәнеү өсөн шарттар булдырыла", - тиелә. Тел юҡ икән, мәҙәниәт тә юҡ. Был турала 57-се статьяла шулай тиелә: "Башҡортостан Республикаһы башҡорт һәм Башҡортостан Республикаһы территорияһында йәшәүсе башҡа милләттәрҙең тарихи һәм мәҙәни мираҫын һаҡлау һәм яҡлауҙы, мәҙәниәт үҫешен тәьмин итә".

Мин халҡыбыҙ тарихын, әҙәбиәтен башҡортса уҡыуҙы хуп күрәм, сөнки шул саҡта ғына уларҙың асылын аңларға мөмкин. Ә "Урал батыр" кеүек эпостарыбыҙҙы мотлаҡ башҡортса уҡырға кәрәк. Күпме аҡыл, фәлсәфә һалынған уларға!

Тәүге уҡыған китаптарым Мостай Кәримдең башҡорт телендәге әҫәрҙәре булды. Рәми Ғариповтың шиғриәтен яратам һәм ошо бөйөк шәхесебеҙҙең исемен йөрөткән 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамланым. Башҡорт йырҙарын бәләкәйҙән яратам. Ғәзим Ильясов, Ирек Ноғоманов, Рөстәм Ғиззәтуллин, Сәғиҙулла Байегет, Радик Юлъяҡшин, Зәһир Ҡунафиндарҙың һәм башҡаларҙы бөгөн дә яратып тыңлайым. Һәм мин уларҙы һәр аҙымдарында, һәр сығыштарында туған телебеҙҙе яҡларға саҡырам. Башҡорт сәнғәт эшмәкәрҙәре туған телдән һаҡланыуын үҙҙәре хәстәрләмәһә, киләсәктә уларҙың йырҙарын кем тыңлаясаҡ һуң?..

***✓ - Тәкәбберләнеп кенә йәшәп булмай ул! Сәсең менән ер ҙә һеперәһең кәрәк булһа! Йөҙ һыуыңды ла түгәһең! Баллар хаҡына! Һиңә, мужыт, ир табылыр, быларға атай табылмаҫ!***



**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА**

# Беҙ алһыуҙары ғына...

(Хикәйә)

Әсемдә үҙем дә аңламаған нимәләр бығырҙап тик тора. Юҡ, ауыртмай ул, әллә нимә эшләй. Өйҙә нимәнеңдер үҙгәргәнен һиҙәм, тик нимә икәнен генә аңлай алмайым. Шатлыҡ йә ҡайғы килер булһа, эсемдәге баяғы нәмәҫтәкәй һулҡылдап һиҙҙерә. Гел генә. Ҡустым тыуыр алдынан да шулайтҡайны. Ул саҡта әсәйем менән атайым миңә бәпес алып ҡайтасаҡтарын әйтмәй, әллә нисек кенә булып үҙгәреп йонсоттолар. Күҙҙәре менән һөйләшеп, ирен сите менән генә йылмайышҡандарын мин күрмәй тип уйлайҙармы икән? Түҙеп йөрөнөм-йөрөнөм дә, тоттом да әйттем:

- Хатта бәләкәй балаға һанап маташаларсы! Әйтмәһәгеҙ ҙә беләм! Вис кенә аңланым инде - ҙур бит инде мин! Быйыл көҙгә мәктәпкә барасаҡмын! Тегеләр аптырашып китте:

- Нимәне аңланың, бәләкәс?

- Бәләкәс булмаһа ярар ине! Ҙур тейем бит!

- Улай булғас, нимәне аңланың, ҙурыҡас?

- Бәпес алаһығыҙ икәнен!

Теге икәү бер-береһенә ҡарап, күҙҙәрен һупайтты. "Һин ысҡындырҙыңмы?" тиеүҙәре инде. Икеһе лә, бер-береһенә инәлеп ҡарап, башын сайҡаны, әйтмәнек, йәнәһе.

- Бына һиңә - мә! - тине атай.
- Кем әйтте, ҡыҙым?

- Әйтмәне! Үҙем белдем!

- Бик яҡшы! Нисек әйтергә икән, тип баш вата инек... Һин ҡаршы түгелме, Тамсыгөл? - Әсәйем йәһәт кенә яныма килеп, ҡосағына ала һалды. Мин үсегеп китмәһен тигәнен беләм инде. "Кәзәм" төкөй башлағанын һиҙҙермәҫ өсөн өндәшмәйем, баш ҡына һелкәм.

- Эй, ҡыҙым, ҙур үҫкәнһең икән шул! Һиңә иптәш итеп ҡусты йә һеңле алып ҡайтабыҙ. Магазинда кемеһе бар, шуныһын алабыҙ... - Мин атайымдың алдағанын вапшы яратмайым. Әллә ҡайҙан беләм шуның алдағанын, хатта әсәйем белмәгәндә лә мин белә лә ҡуям. Шуға тиҙерәк уның алдағын өҙә һалам:

- Эйе шул, шулай бумаһа ярар ине! Магазинда бәпес һатылғанын күргәнең бармы? Бына, әсәйҙең эсендә ята ул, белдиш!

Икеһе бергә пырх итеп ҡалдылар ҙа, алмашлап мине үбергә, иркәләргә тотондолар. Беләм инде - мин тыуасаҡ бәләкәсте артыҡ күрмәһен, үсегеп йөрөмәһен, ҡарашһын, тигәндәрен. Ҡарашырмын да шул! Әтеү бер минең генә бәләкәс туғаным юҡ, башҡаларҙыҡы вис бар. Уларҙың ҡусты-һеңлеләрен илата-илата эйәртеп йөрөгәндәрендә йәнем көйһә лә, хәтәр күрге килә бәпесте! Шуға үсегеүемде лә йәшерергә тырышам: алмай ҡуйһалар, ҡалайтырмын! Илаҡ булһа ла, алһыннар! Әүрәтермен әле!..

...Шул бәпес көткән шатлыҡлы мәлдә лә эсем бығырлап ыҙалатҡайны. Унан ҡәртәсәм килер булһа, йә миңә шәп кенә күлдәк һатып алыр булһалар ҙа кетерләй ине. Алдан һиҙеп тора инем бәхетле минуттарҙы. Ә насар берәй нәмә булырға итһә - эсем икенсе төрлө белгертә. Ҡартатай үлер алдынан да шулайтҡайны: әсеттереп кенә һыҙлағайны.

Бына бөгөн дә иңрәйсе. Уй, атайым йә әсәйем үлеп ҡуймаһын тағы! Мин эстән генә Хоҙай олатайҙан уларға ғүмер һорайым: "Ҡустым менән мин үҫеп еткәнсе генә йәшәһендәр инде!" Ҡәртәсәм өйрәткәйне, хәҙер ураған һайын шулайтып ҡабатлап йөрөйөм. Ә эс барыбер көтөрләй...

Өйҙәгеләрҙең тын алышы ла икенсе кеүек. Кисә кис буйына атайым верандала ултырып, гармун тартты. Күптән уйнағаны юҡ ине, эй уйнаны, эй уйнаны! Элек әсәйем уның гармун тартҡанын ныҡ ярата ине. Эргәһенә ултыра ла, һул яҡ яурынына башын һалып тыңлай. Әйтерһең, шулай терәлеп ултырмаһа, ишетмәй! Мин ана әллә ҡайҙа, өй эсендә ултырһам да ишетәмсе! Атайымды ҡыҙғанып, мин уның икенсе яғынан барып һырылам. Белеп торам, икәүебеҙ ҙә атайға уйнарға мишәйтләйбеҙ. Шулай ҙа китмәйем, әсәй ултырғас, мин дә ҡуҙғалмайым. Ҡай сағында әсәйем гармунға ҡушылып йырлап та ебәрә. "Үтә ҡыҙылдар тиҙ уңа, беҙ алһыуҙары ғына..." Әсәйҙең тауышы матур, зыңғырлап тора! Эй, күңелле була! Бер аҙҙан шыпырт ҡына атай ҙа ҡушыла. Хатта мин дә мөңгөрләй башлайым. Шул саҡта ла эсемдә ниндәйҙер нәмә ҡымырйый башлай, быны хәҙер беләм - шатлыҡ!

Ә был юлы әсәйем хатта атайымдың эргәһенә лә сыҡманы. Ул-был эшен эшләп, быныһын шылдырып, тегеһен рәтләп йөрөнө лә, ишекте асып: "Ин, ят! Күршеләргә йоҡларға хут бирмәйһең!" - тине ят бер тауыш менән. Эсем йәнә һыҙы-ы-ып китте: был инде шатлыҡҡа түгел, бәләгә! Ирешеп-талашып тормағастары, нимә булды икән быларға? Нимәгә әсәйҙең "кәзәһе" төкөгән? Мин юрғанымды башым аша ҡаплап, өҫтөмә ябырылып килгән насар был әйберҙән ҡасып ҡотолорға тырышам. Юҡ, бында ла килеп ингән теге нәмәҫтәкәй, тын алырға бирмәй, тамаҡҡа тығыла. Юрғанымды һирпәм дә, күҙемде сытырлатып йомам: бәлки, шул саҡ мине күрмәй, өйөбөҙҙө урап үтер?..

Атайым шым ғына инде. Гармунын оҙаҡ итеп мыштырҙап, һауытына һалды. Ул гелән шулай итә, әсәйем кеүек шарт та шорт йөрөмәй. "Һин бер аҙым баҫҡансы, мин йөҙҙө баҫам", - тип һуҡрана ине әсәй ҡай саҡ. Минең дә йәнем көйә башланы - ятамы шул бөгөн, юҡмы? Атайым ипле генә баҫып, иҙән таҡталарын шығырҙатмаҫҡа тырышып, эргәмә килде. Хәҙер сәсемдән һыйпап, сикәмдән "әп" итә лә, "Тыныс йоҡо, ҡыҙым!" тип урынына китер. Иртәнсәк тороуға инде был хәл онотолор һәм эсемдең бығырҙауы ла бөтөр!

Юҡ, атай китмәне, карауатыма ултырҙы. Мин йоҡлағанға һалышып, күҙемде сытырҙатып йомдом. Сәсемдән дә һыйпаманы, "әп" тә итмәне. Оҙаҡ ҡына тынып ҡалды. Бер күҙемде генә ҡыҫып ҡарамаһам булмай инде. Атай, нисектер, бөгөлөп, аяҡтарына ҡулын терәп ултырған да... Әллә йоҡлап киткән инде? Мин ике күҙемде лә шар асып ебәрҙем. Ҡараңғыға өйрәнгән күҙемә шундай яҡты булып тойолдо. Атайыма ҡараным да, тын алырға оноттом: ике сикәһе буйлап нимәләр ялтырайсы! Үәт әй! Әллә атайым илай инде!

Минең йөрәгем өҙөлөп төшкәндәй булды! Һикереп тороп, атайымды һыға ҡосаҡлап алдым:

- Атай, үлмә, йәме! Атай, үлмә! Мин башҡа бер ҙә үсекмәйем! Гел генә тыңлап йөрөйөм! Маратты ла илатмайым! Эй, илаһа илаһын, барыбер ҡарайым, әрләмәйем дә! Тик үлмә, йәме!

Минең йән көскә аҡырып илауыма теге яҡтан Марат ҡустымдың илаған тауышы ҡушылды. Хәҙер әсәйҙән эләгә инде, саҡ йоҡлатып ебәргәйне. Мин башыма әсәйҙең йоҙроғо ҡуныуын көтөп, күҙҙе шатырлатып йомам. Хатта илауымды ла оноттом! Юҡ, берәү ҙә һуҡманы ла, хатта өндәшмәне лә... Быныһы бигерәк аптыраҡ! Әсәй әрләшмәй икән, тимәк... Тимәк, был бәлә... Бәләнең эргәһендә беҙҙең илау пүстәк! Быны ла минең эсем аңғарта.

- Атай,- тейем мин шым ғына. - Нимә ул минең эсемде эсетеп тик тора? Һинеке лә шулайтамы?

- Эй, ҡыҙым, Тамсыгөләм, минеке лә шулайта шул... - Әҙ генә шымып, туҙғыған сәстәремде ҡолаҡ артына ҡыҫтыра. - Минең дә йөрәгем һыҙлай... Ныҡ һыҙлай... Һин мине ғәфү ит инде, ҡыҙым! Барыһы өсөн дә ғәфү ит...

- Нимәгә улай тейһең, атай? Атайҙар ғәфү үтенәләр шул! Ниндәй эш боҙҙоң?

- Боҙҙом шул, балаҡайым! Тик... Әле әйтә, аңлата алмайым. Ҙурайғас, аңларһың һәм ғәфү итерһең... Ә хәҙер йоҡла. - Атай көндәгесә мине урыныма яҡыра, матур ғына итеп юрғанымды рәтләп, ситтәрен ҡыҫтыра. Сәсемдән һыйпағас, битемдән үпәс итә лә: "Тыныс йоҡо, ҡыҙым!" - ти. Бөгөн уның тауыш икенсе. Шат түгел. Тыныс түгел. Уның тауышының шылтырап ҡойолоп китерҙәй булып бәүелеп торғанын әллә ҡайһы ерем менән һиҙәм. "Шатлыҡ түгел, бәлә, бәлә..."- тигән уй менән күҙемде йомам һәм бушлыҡҡа осам.

Иртәнсәк күҙемде асыуға уҡ өйҙәге үҙгәреште һиҙәм: өй буш, һыуыҡ төҫлө. Торбаларға ҡулымды тейҙерәм, эҫе! Бөтә нәмә урынында, тик бәләкәй шкаф башында ғүмер буйы ултырған гармундың урыны буш икәнен шәйләйем. Йүгереп барып, кейем шкафын асам - атайҙың тартмаһы... Ишек төбөндәге шифоньерҙы ла ҡуймайым - унда ла яртылаш буш...

- Нимә эҙләнәһең таң менән?
- Әсәйемдең тауышы ла бүтән.

- Эҙләмәйем! - Юрамал шаптырлатып оҙаҡ итеп йыуынам да, кухняға сығам. Әсәйҙең күҙҙәренең ҡыҙарып, шешмәкләнеп тороуын да абайлайым. Өндәшмәйем, йә илап ебәрер, йә таҫтамалы менән елкәгә ҡундырыр. Шулай ҙа сынаяҡ бушап барғанда ысҡынды бит әй баяғы һүҙ телдән:

- Атай сәпсимгә киттеме?

Әсәйемдең ҡулынан сынаяғы чүт төшөп китмәне. Сылтырлатып саҡ урынына ҡуйғас, тыныс булырға тырышып:

- Кем әйтә тағын? - тип һораны.

- Кем әйтһен, эсем әйтә!

Әсәйемдең аптырауының иге-сиге юҡ! Хәҙер әллә ниндәй мәғәнәһеҙ һорауҙарға күмеп ташламаҫ борон тип, йәһәтләп, тышҡа сығып таям. Белеп бөткәнмен, ундай ваҡытта әсәйҙең һорауҙары! Миллион!

Эй, әллә иҫәр инде минең әсәйем! "Үҙең ҡала ҡыҙыһың, үҙең ауыл бисәләренән дә былай прастуйһың! " - ти торғайны атай. Торғайны? Был һүҙҙән минең күҙгә йәш төйөлдө: әйткәйне, үпкәйне, бүләк иткәйне, тип кенә һөйләйбеҙ инде хәҙер. Китте бит! Китте! Икенсе әсәйгә! Ҡатындар китһә, үҙҙәренең әсәйҙәренә ҡайта, ирҙәр китһә - икенсе бисәгә китә икәнен дә беләм. Кем әйткәндер, әллә әйтмәһә лә беләмме икән? Китте бит! Китте бит, Аллаҡайым!

- Шым! Нимә тышҡа сығып яр һалаһың! Бөтөн күршеләр ишетһен тейһеңме? - Әсәйемдең асыулы тауышынан үҙемдең ҡысҡырып уйлағанымды, аҡырып илағанымды аңғарам.

- Үҙең өйҙә илатмайһың да баһа! Ҡайҙа барып илайым мин! Китте бит һуң! - Әсәйем йүгереп килеп мине ҡосағына ала. Быныһын һис тә көтмәгәйнем, осора һуға инде, тиһәм!

- Илама, бәпесем, илама! - ти, ә үҙесе! Үҙенең күҙҙәренән йәше тупырҙап тора! Һааа-ай, әҙәм аптыратып,ҡосаҡлашып, икәүләп аҡырып иланыҡ та ҡуйҙыҡ! Күршеләр ишетә тип тә торманыҡ! Ишетһә ни, көн һайын атайың ташлап китәлер шул!

Эстәге һыҙлап торған нәмә кесерәйә, шиңә барған төҫлө булды, әллә ул шулай илатҡыс бәлә эс тулып торғанға һыймай бығырланы микән?..

...Атай киткәндән һуң көндәр нисек үткәнен тәфсирләп һөйләп тормайым: тәүҙә ғәләмәт ҡыйын булды! Көн дә уны ҡайтып инер тип көттөк. Әсәйем дә көттө. Өндәшмәһә лә һиҙҙем. Күҙен тәҙрәнән алманы. Өс йәшлек кенә ҡустым Марат та тәүҙә атайҙы таптырып илап ялҡытҡайны, хәҙер онотто шикелле. Мин инде ҙур, дүртенсе класта уҡып йөрөйөм.

Ә-ә, онотоп торам. Ҡәртәсәм килгәнде һөйләмәнем бит... Мин дәрестән ҡайтып, тупһала аяҡ кейемен һалырға туҡтағайным, өйҙә шау-шыу ишетелде. Йөрәгем елпенеп ҡуйҙы: атаймы әллә? Әй, юҡ, ҡәртәсәм икән! Ул ғына шулай ҙур өйҙө бер итеп тауыш сығара. Инмәй, тупһаға ултырҙым. Хәҙер мине күрһә, йәлләй башлай ул: атайһыҙ үҫәһең бит, балаҡайым! Атайың була тороп етемһең! Күп ишеттем быларҙы атай сығып киткәндән бирле. Ул ҡайтҡас инермен.

Гел ҡысҡырып һөйләй ул, интонация менән, кәрәкле ерենә баҫым яһап тороп - уҡытыусы булған бит. Әле лә әсәйемде игәп маташыуы :

- Бар, килен, бар! Эйелгән башты ҡылыс киҫмәҫ, инәл, ялбар, алып ҡайт! Балларыңды атайһыҙ үҫтермәксеһеңме? Ҡыҙың ярар - кеше балаһы, малайың бар бит! "Атайһыҙ ул үҫтермә" тип бушҡа әйтмәгәннәр!

- Ҡуйсы, ҡәйнәм. Бармайым да, йөрөмәйем дә... Һөйләшелгән, аңлашылған...

- Тәкәбберләнеп кенә йәшәп булмай ул! Сәсең менән ер ҙә һеперәһең кәрәк булһа! Йөҙ һыуыңды ла түгәһең! Баллар хаҡына! Һиңә, мужыт, ир табылыр, быларға атай табылмаҫ!

- Етте, ҡәйнәм, - әсәйҙең тауышы инәлесле. - Йығылғанды түпәләргә килдеңме ни? Былай ҙа көнөм - көн, төнөм - төн түгел...

- Илама! Торма бында танау мышҡылдатып! Ана, Йәнтимергә барып ила! - Ҡәртәсәмдең тауышы ҡапыл ғына тонoҡлана. - Эй, килен, килен... Ниндәйҙер бер һалҡынлыҡ бар һиндә... Ҡырыҫлыҡ. Шул ҡырыҫлығың менән биҙҙерҙеңме әллә? Ауыл балаһы, тип эшкә һанаманыңмы? Үҙебеҙгә генә ҡайтып, мал көтөп йәшәһәң, эргәлә йәш бисә-сәсә булмаһа, әллә йәшәп тә ятыр инегеҙ! Ҡайтманың бит ошо гурытыңдан! Һыйыр һаумайым тип! Хәҙер осло тырнаҡтарыңдан ни фәтеүә!

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЗАРАРЛЫ РИЗЫҠТАР

■ Цюрих университеты һәм Аделаида университетының медицина мәктәбе онкологтары ҡыҙыҡлы асыш яһаған. Күп балалы ғаиләлә үҫкәндәр яман шеш менән ауырымай тиерлек. Был ғаилә ағзалары - атай, әсәй, балаларға ғына ҡағылмай. Күп балалы ғаилә менән бергә йәшәгән башҡа ике-өс туғандарҙы ла был хәүеф урап үтә икән. Күкрәк яман шеше хәүефе, мәҫәлән, ҡатындың нисә тапҡыр ауырға ҡалыуы менән бәйле. Ғалимдар быны күптән асыҡлағайны. Ҡатын баланы күберәк тапһа, күкрәк яман шеше менән ауырымаясаҡ. Ә һуңғы яңылыҡҡа килгәндә, уны белгестәр шулай аңлата: ғаилә тормошо ваҡыты-ваҡыты менән стресҡа килтерһә лә, ул ыңғай хистәр мөхите лә булдыра, ә бындай мөхиттә йәшәгәндәр, билдәле булыуынса, ауырыуҙарға бирешмәй.

■ Бөгөн зарарлы ризыҡтар тураһында артыҡ күп һөйләбеҙ, ахыры. Ғалимдар тағы ла уларҙың исемлеген төҙөгән. Тәүге урында колбаса менән сосиска кеүек эшкәртелгән ит продукттары ингән. Продукттың хаҡы ни тиклем түбән, уның сифаты ла насар. Осһоҙло колбасала иттең бөтөнләй булмауы ла бар, ә бына сәләмәтлек өсөн зыянлы булған тәм, төҫ биреүсе компоненттарҙы иҫәпләп бөтөп булмаясаҡ. Икенсе урында осһоҙло сырҙар. Диетологтар билдәләүенсә, уларҙың составында маргарин күп була. Ә тәбиғи һөттө бындай продукттарҙа табып булмаясаҡ. Ҡыҫҡаһы, бындай сыр йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн зарарлы. Консервалағы продукттар менән дә һаҡ булығыҙ. Металл банка окислана, тимәк, уның эсендәге балыҡ йә башҡа продукттың сифаты түбәнәйә.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, фастфуд һәм башҡа төрлө зарарлы ризыҡтар яратҡан ҡатын-ҡыҙҙар үҙ балаларын ғына түгел, ейәндәрен дә диабет, алкоголизм, наркомания кеүек тайпылыштарға дусар итеүе ихтимал. Цюрих университеты белгестәре һынауҙарҙы ҡомаҡтарҙа үткәргән. Ғалимдар инә ҡомаҡтарҙы майлы ризыҡ менән һыйлаған. Был ҡомаҡтар балаларына матдәләр алышыныу менән бәйле проблемалар ғына түгел, төрлө бәйлелектәр ҙә "бүләк" иткән. Зарарлы ризыҡтар менән туҡланыуҙың тәьҫире өс быуынға тиклем еткән. Матдәләр алышыныу һәм наркомания, эскелеккә бәйлелек кеүек проблемалар ген менән бирелгән. Ғалимдар әйтеүенсә, атайҙарҙың дөрөҫ туҡланмауы ла ошондай уҡ һөҙөмтәләргә килтерә.

■ Толедо университеты тикшеренеүселәре балаға уйынсыҡты күп итеп алыу хата, тип белдерә. Улар 36 баланы күҙәткән һәм ошондай һығымтаға килгән. Ата-әсәләр балаларҙы уйнау зонаһында ярты сәғәткә ҡалдырып киткән һәм ҡайһы берҙә уйынсыҡтар иҫәбе - 4, ҡайһы берҙә 16 булған. Уйынсыҡтар аҙыраҡ булған һайын, бала фантазияһын йышыраҡ ҡулланған. Бынан тыш, уйынсыҡтар аҙ булғанда, бала уларҙың һәр береһе менән уйнаған. Күп ваҡытын был уйынсыҡтар менән тағы ла ниндәй уйын уйнарға була икән, тип баш ватҡан. Был һығымталар баланың уйынсыҡтары күп булмаҫҡа тейеш тигәнде түгел, ә бер юлы балаға күп уйынсыҡ бирмәҫкә кәрәклекте раҫлай. Шулай уҡ малайҙарға ҡурсаҡ, ҡыҙҙарға машина менән уйнарға мөмкинлек бирергә кәрәк. Был гармониялы үҫеш өсөн мөһим.

УЙЛЫҒА -УЙ

# РУХИ ҠИММӘТТӘРЕБЕҘ...

## халҡыбыҙҙы һаҡлаясаҡ



**Бөгөнгө көндә үҙеңде тап, үҙеңде яратырға өйрән, тигән саҡырыуҙар, бәхетле, уңышлы булыу серҙәрен асырға вәғәҙә иткән тренингтар күбәйҙе. Әммә йәнде дауалау, йәнде имләү, йәнде шифалау тигән күренеш халыҡ медицинаһында ла бар. Динебеҙ ҙә йән менән физик тәнде айырып ҡарай. Тимәк, борондан килгән йолаларыбыҙ һәм дин тәртиптәренә тоғролоҡ һаҡлап йәшәй белеү - бәхетле, уңышлы булыуҙың сере түгелме һуң? Бөгөн ошо һорауға Нурмөхәмәт хәҙрәт НУРИЕВ менән яуаптар эҙләйбеҙ.**

**➔ Заман үҙгәрһә лә, дөйөм кешелек өсөн уртаҡ булған әхлаҡи ҡанундар шул килеш ҡала. Хәҙерге заман кешеһенә ниндәй сифаттар етмәй, тип уйлайһығыҙ?**

- Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! Донъялағы диндәр ҙә, быуаттар буйына формалашҡан әхлаҡи ҡанундар ҙа бер-беребеҙгә ҡарата мөхәббәтле, ихтирамлы, түҙемле булыу, бер-беребеҙҙе ғәфү итә белеү, мәрхәмәтлек, тыныслыҡ, ireклек кеүек принциптарға нигеҙләнгән. Бөгөнгө заман менән үткән заман халыҡтарының тормошон сағыштырған ваҡытта, халыҡтың матди хәле яҡшы, әммә рухи торошо фәҡирләнә бара. Намаҙ уҡырға ла өйрәнә кеше, мәсеттәр ҙә һала, хәйриә эштәрендә лә ҡатнаша, матур итеп балалар ҙа тәрбиәләй, шуның менән бергә руһи ҡиммәттәргә өлгәшә алмай, сөнки ихласлығы юҡ. Ихласлығы булмау сәбәпле, бөгөн биргән ун һум хәйере иртәгә мең һум булып әйләнеп ҡайтыр тип көтөп йәшәй. Ураҙа тотҡаны, намаҙ уҡығаны, хажға барғаны өсөн нимәләр көтөп йәшәй икән, кеше ул ғәмәлдәрен юҡҡа сығара. Мәсет һалалар ҙа, үҙҙәренең исемен бирергә тырышалар, хажға барып, ниндәйҙер дәрәжә яуларға теләйҙәр, бер-береһенә ярҙам итәләр һәм дошман булып ҡалалар, сөнки был эштәр матди донъя менән бәйле булып китә.

Беҙҙең тәнебеҙ һәм йәнебеҙ бар. Йәнебеҙҙе, рухыбыҙҙы күтәрә торған нәмә - ул иман һәм ихсан. Дин - иман, ихсан - ул ихласлыҡ, күңелдән сыҡҡан нәмә. Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында беҙҙең һәр ғәмәлебеҙ яҙыла, ихласлыҡ менән эшләнмәгәндәре барыһы ла юҡҡа сыға, сөнки улар кеше күҙе күрһен өсөн, дәрәжә өсөн, маҡталыр өсөн генә эшләнгән. Уларҙың ҡиммәте юҡ.

**➔ Яҡшылыҡ сәсһәң - яҡшылыҡ урырһың, ти халыҡ. Бумеранг законы бар тип раҫлай белгестәр, йәғни, ҡылған ҡылыҡтарың: изгелеге - изгелек, яуызлығы яуызлыҡ булып үҙеңә кире әйләнеп ҡайта. "Урал батыр" эпосында ла, яҡшылыҡ булһын атыңды, яманға юл ҡуймағыҙ, тиелә. Кешелектең төп бурыстарының береһеме - яҡшылыҡ ҡылыу?**

- Аллаһы Тәғәлә, бер-береһенә ҡарата изгелекле булһындар тигән сәбәп менән ебәргән бәндәләрҙе ергә. Ул бөтөн гонаһтарҙы ла ғәфү итә, тик беҙҙең араларыбыҙҙа булған гонаһтарҙы ғына ғәфү итмәй - улары иң ауыр гонаһтар. Кешенең күңелен ҡыйыу өсөн күп кәрәкмәй, тел - һөйәкһеҙ. Шуға ла изгелек таратығыҙ тигәндә лә, ҡул менән генә түгел, иң тәү сиратта, йөрәктән сыҡҡан һүҙ менән, тел менән әйтелгәндә күҙ уңында торорға кәрәк. Ысын күңелдән эшләгән һәр бер эш - ул да изгелек. Саҙаҡа биргәндә лә тәүҙә ихлас күңел кәрәк, ул аш әҙерләү, таҫтамал таратыу ғына түгел.

**➔ Бөгөнгө заман кешеһенең тағы бер трагедияһы - ул күпте теләй. Һәм бөтөн нәмә лә уға ошо мәлдә кәрәк. Бигерәк тә матди етешлеккә ынтылыш уның аңын томалай, кәрәккәнен дә, кәрәкмәгәнен дә ҡулына төшөргәнсә килә. Ошоларға өлгәшә алмаһа, өмөтһөҙлөккә бирелә. Тап ошо "депрессия" тигән модалы заман сиренә алып килмәйме?**

- Олатайым: "Балам, һин йоҡлап ятма. Һин йоҡлап ятҡандан тормош алға китмәй ҙә инде", - тип әйтер ине. Етеш йәшәргә ынтылыу насар ҙа түгелдер, тик бының өсөн эшләргә кәрәк бит. Бәйғәмбәребеҙ, ғәләйһиссәләм, Аллаһы Тәғәләгә доға ҡылып: "Булмай торған, тормошҡа ашмай торған мәғәнәһеҙ өмөттәрҙән мин һиңә һыйынам", - тигән. Бына ошо мәғәнәһеҙ, эшкә ашмай торған өмөттәр кешене юҡҡа сығара. Шуларға бирелеп китә лә, ғүмерен бушҡа уҙғара әҙәм балаһы. Ҙур эш хаҡы алғыһы килә, ҙур машинала йөрөгөһө килә. Бигерәк тә йәштәр хафаландыра. Шундай булыуҙарында уларҙың ата-әсәләре лә ғәйепле, тип иҫәпләйем. "Үҙебеҙ еңеллектә, етешлектә йәшәй алмаҡыҡ, исмаһам, балалар йәшәһен", - тиҙәр ҙә, матди яҡтан ярҙам итеп хәлдәре бөтә. Һөҙөмтәлә ялҡау, интернетта ғына ултырырға яратҡан, үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ ала ла белмәгән быуын тәрбиәләйҙәр. Көнкүреш кимәлендә генә алайыҡ: уларҙың күптәре картуф әрсей, утын яра белмәй. Берәй катаклизм килеп сыға икән, беҙ, ярай, ашай торған үләндәрҙе таныйбыҙ, ә улар нишләйәсәк? Айфон тотоп, аслыҡтан ҡырыласаҡмы? Кешенең иманы, рухи эске үҙәктәре булмауы насар ғәҙәттәргә алып килеүен әйтеп торорға ла түгел.

Үҙебеҙҙең халҡыбыҙҙы, киләсәк быуыныбыҙҙы, йәштәребеҙҙе тәрбиәләү өсөн дингә генә түгел, борондан килгән рухи ҡиммәттәребеҙгә иғтибар итеп, баларыбыҙ менән туған телебеҙҙә һөйләшһәк, киләсәгебеҙ булыр. Сөнки беҙҙең халҡыбыҙҙың булмышы - кешелеклелек, шуның өсөн дә Аллаһы Тәғәлә уға Урал бәйғәмбәрҙе ебәргән. Шуның өсөн дә беҙҙең халыҡ гел дөрөҫлөктө яҡлап сыға һәм уның асылы шунда. Рухыбыҙға таяның, бер-беребеҙ өсөн хәстәрлекле, яуаплы булып, ошоно тойоп йәшәргә кәрәк беҙгә. Тик Көнбайыштыҡын үҙләштерергә түгел, ә үҙебеҙҙең мәҙәниәтте һаҡларға кәрәк. Мәҫәлән, һуңғы осорҙа туған телдәргә бәйле проблемалар килеп сыҡты. Туған телде белеү, өйрәнеү кәрәкме, тигән һорау булырға ла тейеш түгел ине. Икенсе яҡтан, туған телебеҙҙе белмәҫкә беҙ берәй яҡтан көсөп килгән халыҡмы ни? Социаль селтәрҙәрҙә, ниндәй телдәр беләһең, тигән һорауға күптәр: башҡорт, татар телен, тип яҙа. Был тел белеүгә һаналмай, туған телеңде һин былай ҙа белергә бурыслыһың. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, беҙҙең олатайҙар кәм тигәндә 5-6 тел белгән! Бөгөнгө заман кешеһе, әйтәйек, төрөк телен, инглиз телен, мосолман булараҡ, ғәрәп телен белергә тейештер. Киләһе быуатта, моғайын да, ҡытай телен белеүҙең кәрәге тейер. Әгәр ҙә һин туған телеңде белмәйһең икән, башҡа телдәрҙе лә өйрәнә алмайһың. Туған тел, ғөрөф-ғәҙәттәр, халҡыбыҙға, ватаныбыҙға һөйөү тәрбиә нигеҙен алып торорға тейеш. Телебеҙҙе, динебеҙҙе, халҡыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалһаҡ, барыһы ла урынына ҡайта ул. Шул саҡта ғына беҙ Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле халыҡ булып ҡалабыҙ. Ә Ул рәхмәтле халыҡты күтәрә.

**➔ Аллаһы Тәғәлә менән беҙҙе тоташтырыусы нәмә ул - уй. Нимә уйлайһың, шул алдыңа килә, тиҙәр. Ошо дөрөҫмө?**

- "Аллаһу ниәти" тигән һүҙ, Бәйғәмбәребеҙҙең: "Кешенең һәр эше уның ниәте менән бәйле", - тигән хәҙисе бар. Хатта яман, насар ниәт тә тормошҡа аша, тик бының өсөн кеше язаһын да ала. Бер туҡтауһыҙ аҡса уйлап йәшәгән кешегә уныһы ла килә. Һөйгәнеңде эҙләһәң - уны табаһың, балалар теләһәң - балалар килә, йортло булғың килһә - мөмкинлек табыла һ.б. Аллаһы Тәғәлә һин нимәне теләйһең, шуны бирә, әммә теге донъяла бөтөн нәмә өсөн дә яуап бирергә тура киләсәк. Шуға ла кеше мәғәнәһеҙ өмөттәрҙән һаҡланып, юғары маҡсаттар ҡуя белергә тейеш.

Кешенең юл һайлау мөмкинлеге бар. Бер яҡтан, Аллаһы Тәғәлә һинең тәҡдиреңде билдәләгән. Йәғни, һинең менән нимә булырға тейеш, Ул уны яҙған һәм уны Ул ғына белә. Әммә тормошта үҙ алдыңа маҡсаттар ҡуйып, бар нәмәгә үҙеңдең ниәтең

**✓ *Сабырлыҡ - ул Аллаһы Тәғәләнең бүләге, унының өҫтөндә эшләргә, булғанын һаҡлап, шөкөр итергә кәрәк. Сабырлыҡтың төбө һары алтын, ти халҡыбыҙ ҙа. Бөгөнгө заман кешеһенә сабырлыҡ етешмәй.***



менән өлгәшәһең һәм улар өсөн бер кемде лә, хатта Аллаһы Тәғәләне лә ғәйепләй алмайһың. Сөнки был юлды үҙең һайлағанһың, үҙеңдең ҡулың, аҡылың, эшең менән яҡшыһын да, насарын да үҙең тапҡанһың. Шул уҡ ваҡытта, әгәр алдан тәҡдиреңде белгән булһаң, һин ғәйепле булыр инең. Аллаһы Тәғәләнең хикмәте шунда - ул хәлде һин белмәнең. Тарихта шундай хәлдәр булған, бик яуыз кешеләр - яҡшы, бик яҡшы кешеләр яуыз булып донъянан киткәндәр. Шуның өсөн яуызлыҡтан ҡурҡыу, изгелеккә ынтылыу һәр ваҡыт булырға тейеш һәммәбеҙҙә. Ә ысынбарлыҡта иһә, беҙҙе нимә көтә, Ул ғына белә. Шуға ла насарлыҡ күргәндә, Аллам һаҡла, тип, яҡшылыҡ күргәндә, Алла бирһә, тип йәшәйбеҙ.

Ысынында иһә, Аллаһы Тәғәлә мине күрә, минең был эштәрем дөрөҫ, тигәнгә инанған кеше алдында кәртәләр юҡ. Беҙ үҙебеҙгә үҙебеҙ кәртә ҡуябыҙ. Бөгөн психологтар, һин яҡшы малайһың, һин әсәйеңә, атайыңа кәрәкһең, тип кешенең күңелен үҫтерә. Ул ошо рәүешле яҡтылыҡҡа сыға, әммә артабан нимә эшләргә белмәй. Рухи ҡиммәттәрҙе баһалаған кешеләр араһына барып эләкһә, яҡшы ла. Ә Ислам психологияһы кешене үҙ-үҙенә аса: мин шәхес, минең бар үҙемә билдәле етешһеҙлектәрем, бар үҙемә билдәле яҡшы яҡтарым. Һәм мин ошо булған мөмкинлектәрем менән нимә эшләй алам, тигәнгә һорау эҙләй ул. Бында өмөтһөҙлөк юҡ. Өмөтһөҙлөк, булырмы икән, булмаҫмы икән тип, шиккә урын ҡалдырған кешелә генә була. Намаҙ уҡыһам, ҡабул булырмы икән, юҡмы икән, тәһәрәтте дөрөҫ алдыммы икән, юҡмы икән, тип, шиккә бирелә ундайҙар. Аллаһы Тәғәлә үҙе беҙгә өмөт бирә, әҙәм балаһын өмөт йәшәтә, тибеҙ. Хатта был донъяла бер нәмәгә лә өлгәшә алмаһаң, һәр хәлдә теге донъяла барыһы ла килеп сығасаҡ, бары тик маҡсатыңа тоғро ҡал, дөрөҫлөктән ситкә тайпылма, Аллаһы Тәғәлә һиңә ярҙам итәсәк. Кеше шулай үҙен-үҙе контролдә тотоп, үҙенең эштәренең хаҡлығына ышанһа, тормошта үҙенең юлын таба.

**➔ Диндә сабырлыҡҡа өндәү бар. Халҡыбыҙ ҙа артыҡ ҡайғырыуҙы ла, артыҡ шатланыуҙы ла тыя. Сабырлыҡ - ул кешенең иң күркәм сифатымы?**

- Аллаһы Тәғәләнең 99 исеме бар: Ул - ашатыусы, Ул - күреүсе, Ул - белеүсе һ.б. Шуларҙың 99-сыһы, иң аҙаҡҡыһы - сабырлыҡ. Сабырлығы булған кеше тормошта бәхетле. Ысынында иһә, ул ҙур сифат, уны һорарға, уға лайыҡ булыу өсөн тырышырға кәрәк. Изге әүлиәләр һәм бәйғәмбәрҙәр, уларға күпме генә насарлыҡтар эшләһәләр ҙә, сабырлыҡ менән ҡабул итә һәм күтәрә белгән. Ә беҙ автобуста бер туҡталыштан икенсеһенә барып еткәнсе аяҡҡа баҫыусыға, ҡысҡырып һөйләшеүселәргә йәки кемдеңдер шылтыраған телефонына йәнебеҙ үртәлеп килә, сыбырлыҡ етмәй. Сабырлыҡ - ул Аллаһы Тәғәләнең бүләге, унының өҫтөндә эшләргә, булғанын һаҡлап, шөкөр итергә кәрәк. Сабырлыҡтың төбө һары алтын, ти халҡыбыҙ ҙа. Бөгөнгө заман кешеһенә сабырлыҡ етешмәй. Икенсе яҡтан ҡарағанда, сабырлыҡ булмауы - ул кешегә яза ла. Йәғни, кешенең был донъялағы ҡәнәғәтһеҙлеге уның үҙен ғазаплай. Тегеһе-быныһы юҡ, күршемдекенә ҡарағанда эш хаҡым, фатирым бәләкәй һ.б тип, был тормошта үҙебеҙгә-үҙебеҙ проблемалар уйлап сығарабыҙ. Былар барыһы ла күңел тыныслығын юғалтыусы әйберҙәр. Ә уның төп шифаһы - сабырлыҡта. Сабырлыҡ булһа, Аллаһы Тәғәлә тормош ауырлыҡтарын еңеп сығырға форсат бирә.

Бөгөн тормошта ике нәмә дефицит: береһе - рәхмәтле булыу етмәй һәм сабырлыҡ. Аҡыллы кеше иң тәүҙә эргә-тирәһендәгеләргә рәхмәтле була, атай-әсәйенә, туғандарына, яҡындарына рәхмәтле була белгән кеше Аллаһы Тәғәләгә лә рәхмәтле була. Һин үҙеңде намыҫыңа ҡарап, Аллаһы Тәғәләгә ниндәй миҡдарҙа рәхмәтле була алаһың, ана шул динлелек тип атала. Сағыштырып ҡарағанда, әсәй кеше балаһын нисек ярата, Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе уға ҡарағанда ла нығыраҡ ярата. Бәләкәй генә сабый килеп, күҙҙәреңә ҡарап, рәхмәт, тип әйтһә лә, һин уның ҡылған кире ҡылыҡтарын ғәфү итергә әҙерһең. Әҙәм балаһы ла, Аллаһы Тәғәләгә мең рәхмәт тойғоһо кисереп йәшәһә ине.

Мәҫәлән, бар бер әбей, заманында балалар тәрбиәләгән, донъяһын көткән, һыйыр һауған, картуф ултыртҡан һ.б. Уның менән һөйләшеүе лә күңелле, сөнки һәр өсөнсө һүҙендә "Аллаға шөкөр" ти: "Аллаға шөкөр, ризыҡ бар, иҫән-һаубыҙ, балалар ҡайтып йөрөй, пенсия килеп тора, киленем һәйбәт". Ә икенсе кешегә кәңәш һорап барһаң, үҙең уға ярҙам итерҙәй булаһың - проблемаларына зарланып тик ултыра. Донъяға ыңғай ҡарашлы кеше - рәхмәтле кеше. Башҡорт халҡының өҫтөнлөгө, беҙҙең халыҡта булған юғары сифаттарҙың береһе лә рәхмәтле була белеү.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был тормошта барыһы ла ябай ғына. Изгелек эшләһәң, ҡыуаныс кисерерһең, үҙеңде бәхетле тойорһоң. Ихлас булһаң, ихласлыҡ менән яуап ҡайтарырҙар. Халҡыңа файҙа килтерһәң, ул да һиңә рәхмәтле булыр. Был исемлекте әллә күпме дауам итергә була. Кешенең тауҙы урынынан күсереп ҡуйыр, бөтөн донъяны үҙгәртер көсө булмаһа ла, үҙенең тормошон яҡшы яҡҡа бороп ебәрер ҡеүәте бар - бөгөнгө әңгәмәбеҙ ошоно ҡабаттан хәтерҙәребеҙгә төшөрһә ине. Энергиябыҙҙы файҙалы эштәргә йүнәлтергә өйрәнеп, борондан килгән рухи ҡиммәттәребеҙгә, динебеҙгә таянып йәшәү - ул, ысынлап та, йәшәйебеҙҙең нигеҙелер.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

# БАҒЫР БАЛЫҒЫ



**Башҡорт дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре Бөрйән районындағы сенсация тураһында һөйләй: һуңғы 55 йыл эсендә тәүгә Айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәһендәге Урал йылғаһы бассейны йылғаларында бағыр (форель) балығы табылған.**

